**Йыһат Солтанов**

**ЫРЫП ЯҘҒАН ЫРЫНДАРЫБЫҘ**



# Бөйөк дәүләтебеҙ Төрк ҡағанаты (552 – 745 йй.) заманынан ҡалған Силәнгә -- Өргөн (Селенга – Орхон) ырын (рун) яҙмалы ядкәрҙәрҙең [1] хәҙерге башҡорт алфавитына әҙмә-эҙ күсерелеше.

*Башҡаларым кеүек үк, байтаҡ йылдар элек яҙылған әҫәр был; уға тотонорға мине, әҙәбиәтсене, дөйөм мәҙәни мохтажлыҡ мәжбүр ҡылды. Эш шунда: бабаларыбыҙҙың атаҡлы ырын-ядкәрҙәрен әлегәсә төрки телле ғалимдарҙан һәм бигерәк тә* ***башҡорттарҙан*** *(һәй, үкенес!) туранан-тура уҡып ҡараған һәм әлеге заман алфавитына теүәл итеп күсереп яҙған инсан юҡ: бөтәһе лә иҫке төрки телгә генә нигеҙләнеп эш иткән, башҡорт телен иҫәпкә алмаған атаҡлы урыҫ ғалимы С.Е. Маловтың (1880 – 1957) билдәле өс хеҙмәтенән һәм шул ғалимдан тукланыусы мәшһүр И.В. Стеблеваның "Поэтика древнетюркской литературы и ее трансформация в ранне-*

*классический период" тигән китабынан күсереп шөғөлләнә -- шул арҡала ҡайһы бер етешһеҙлектәр үрсеп китә.*

*Милләтем ҡанбабаларының ядкәрҙәрен йәш быуын милләттәштәрем туған телебеҙ ҡыҫаларында ырындарҙан туранан-тура уҡыһын, уҡырға өйрәнһен, тип, ырын яҙыулы текстың нумерланған һәр юлын нәүбәте буйынса айырым күсереп, аҫтына шул уҡ нумер менән бөтә ырын-хәрефтәрен теүәл рәүештә бөгөнгө башҡорт хәрефтәренә әйләндереп яҙҙым, аҫтараҡ текстың бөгөнгө башҡорт телендәге уҡылышын өҫтәнем. Ырын яҙыу уңдан һулға ҡарай уҡыла, һүҙҙәр бер-берешенән ике нөктә (:) менән айырыла. Интернет битенә урынлаштырыу ҡағиҙәһенә ярашлы, текстағы иҫкәртмәләрҙең тәртип һандары дүрткел йәйәләрҙә күрһәтелеп, шуларға тейешле аңлатмалары төп текст дауамында "Иҫкәртмәләр" тигән киҫәтеү аҫтында төркөмләнде. Туған халҡының һәм ғөмүмән төрки халыҡтарының тарихы менән ҡыҙыҡһыныусы һәр беребеҙ был хеҙмәттән тейешле фәһем алыр, юғары синыф уҡыусыларына һәм студенттарға ла ҡулайлы әсбаб булыр, тип өмөтләнәм.*

"Ырын" (рун, руна) – ғәзиз бабаларыбыҙҙың ағасҡа йә ташҡа ырып яҙыу ысулы ул (башҡорт кешеһе әлегәсә ағасҡа ырып биҙәк һала йә яҙа, былар "ырын" тип атала). Үҫәргән башҡорттарының Әсә-Бүрегә табыныусы Әсинә [2] йәки Ашина тармағы [3] нигеҙләгән Бөйөк дәүләтебеҙ Төрк ҡағанаты (552 – 745) заманында Силәнгә [4] йылғаһы (көньяҡлап Байкал күленә ҡоя) буйында Белге Утан Уҡымышлыһы [5] (бәғзеләр уны "Тоньюкук" тип уҡый) хөрмәтенә һәм Өргөн йылғаһы (Силәнгәгә ҡоя) буйында Көли [6]-туған [7] (731 йылда үлгән) батыр иҫтәлегенә уларҙың зираттарына 717 – 718 йылдар арауығында ҡуйылған ядкәрташтар шул заман бабаларыбыҙҙың тарихын һәм яҙыу өлгөһөн иң ҙур текстар рәүешендә беҙҙәргә килтереп еткергән иң ҡиммәтле ҡомартҡылар булып тора (ҡағыҙға яҙылған ырын хәрефле китаптарыбыҙҙы, "яҙыҡ" йәғни "яҙыулы" мәжүси дин доғалары һанап, ғәрәп баҫҡынсылары юҡ итеп бөтөргән).

Иҫкәртмәләр:

[1] "Ядкәр" тигән боронғо башҡорт һүҙебеҙҙе "йәдкәр" тип боҙоп яҙмауығыҙҙы һорайым.
[2] Әсинә (Ашуна) – "әсәнән (ашанан)" – йәғни Әсә-Бүренән тыуған тоҡом тигән мәғәнәлә. Шунан килә Әсә-Бүренең боронғо ләҡәптәре *суна* (һуна -- бүре), *шуна* (бүре) һәм "бүренән тыуған" *үсүн* башҡорттары.
[3] Үҫәргән ҡәбиләһенең "ата бүренән тыуған" көнбайыш тармағы -- Әсүрә (Асура), шунан килә *сура-бүре* (һоро-бүре), *серый-волк,* америка ацтектарының *зорро* (соро-бүре тигәндән), шулай уҡ *Әсүрә-ҡан (һоро-бүре ҡаны) – Үҫәргән* этнонимы.
[4] Силәнгә -- ташҡын һыу тигән һүҙ.
[5] Белекле, Билгеле Утан (төркиҙәр идара иткән Ҡытай) Уҡымышлыһы (шунда уҡып ҡайтҡан) зат – Илтиреш ҡағандың ике туған апаһы, ә аҙаҡ ҡатыны, Көли-туғандың ҡәбер ташына ырып яҙылған ядкәрҙең авторы Юллыҡ-туғандың үгәй әсәһе йәки апаһы.
[6] Был исем инде "Ҡолой" тип әйтелә. Иҫке төрки телдә "кө" – дан тигән һүҙ.
[7] Туған – хан менән бер туған, принц.

Билдәле булыуынса, Ашина йәғни Үҫәргән ырыуы баһадиры Быуман [8] 552 йылда үҙен дәүләт башлығы – ҡаған тип иғлан ҡыла ла тирә-яғындағы ырыу-ҡәбиләләрҙе үҙ ҡулы аҫтына бөрөү өсөн ныҡышмалы һуғыштар алып бара. Һөҙөмтәлә 555 йылға тиклемге көрәштәрҙә бөтә Үҙәк Азия, тип әйтерлек, яулап алына, 571 йылда иһә Төрки ҡағанат сиктәре көнбайышҡа табан Урта Азиялағы Амударъяғаса киңәйә. Әммә эске ҡаршылыҡтар һәм көньяҡ ҡырыйҙағы яуыз дошман Ҡытай ҡотҡоһо арҡаһында ҡағанатта ырыу-ҡәбилә ара болғаныштар (582 – 603) ҡубынып, берҙәм дәүләтебеҙ үҙ-ара дошманлыҡлы ике өлөшкә -- Көнсығыш Төрки ҡағанат (Үҙәк Азияла) һәм Көнбайыш Төрки ҡағанат (Урал – Урта Азияла) бүленә.



630 йылда Ҡытай менән һуғышта төркиҙәр еңелеп, ярты быуат буйына Ҡытайға буйһоноп йәшәй. 681 йылда Ҡотлоҡ хан етәкселегендә халыҡ Ҡытай ҡоллоғона ҡаршы баш күтәреп, Көнсығыш Төрки ҡағанат ҡабат тергеҙелә. 693 йылда [9] был Ҡотлоҡ хан үлгәс, урынына ултырған ағаһы Мышы [10] үҙен Ҡапаған [11] ҡаған (693 – 716) итеп иғлан ҡыла, уның заманында Көнсығыш Төрки ҡағанат сиктәре ҡабат Манчжуриянан алып Сырдаръяғаса киңәйтелә, төрки алғаҫҡылары Сәмәрҡәндкәсә барып етә, ләкин ғәрәптәрҙән еңелә (712 – 713).

Ҡапаған ҡағандан һуң тәхеткә ултырған уның улы Юллыҡтуған, Төрк Белеге ҡаған (716 – 734) ләҡәбен алып, дошман Ҡытай һәм уның берләшмәндәренән дәүләтте ҡурсалау өсөн, үҙенең бер туған ҡустыһы – данлы яу башлығы Көли-туған менән бергә бер туҡтауһыҙ яу йөрөй, бик күп дәһшәттәрҙе еңеп сығалар.

Иҫкәртмәләр:

[8] Быуман (ғәҙәттә Бумын тип яҙалар) – дошмандарын быуыусы (Душитель) мәғәнәһендәге ләҡәп, һуңынан Рәсәйҙең Иван IV батшаһын Яуыз (Грозный) тигән кеүек.
[9] Л.Н. Гумилев иҫәбе буйынса.
[10] Ҡытай яҙыуында Мочжо.
[11] Ҡапаған – ҡапаҡ (һәр яҡлап та килешле) тигән һүҙебеҙҙән.

Төрки ҡағанаттың иң ҡурҡыныс һәм төп дошманы, әлбиттә, тарихи әҙәбиәттә (минеңсә, ырындарҙы яңылыш уҡыу арҡаһында) *"табгач"* [12] тип йөрөтөлгән Ҡытай империяһының хакимлыҡ итеүсе "Төньяҡ Вэй" ("Северная Вэй") династияһы (батшалар нәҫеле) ул. Шуныһы бик ғибрәтле: Утан [13] тигән был дәһшәтле Ҡытай империяһын, ундағы саф ҡытай династиялы "Һуңғыраҡҡы Йән" ("Поздняя Янь") дәүләтен 397 йылда тар-мар ҡылып, Ҡытай йылъяҙмаларында "сяньби" [14] тип яҙылмыш үҙебеҙҙең Үҫәргән башҡорттары нигеҙләгән, тәхетендә беренсе император булып шул Үҫәргән башҡорттарының ғәййәр юлбашсыһы Тоб Ағай (ҡытайса Тоба Гуй) уҙаман ултырған; был иһә уның ата-әсәһе ҡушҡан исеме түгел, ә тап хәҙерге башҡорттағы "ил ағаһы", "ил-аға", "ил-ағай" тигәнебеҙсә, ололап та хөрмәтләп әйтелмеш ләҡәп булып тора (бында хәҙерге "ил" һүҙен

“туб” йәғни тупланмыш халыҡ, түбә һүҙе алмаштырған). Уға дәүләт төҙөшкән һәм империяның етәкселек ҡатламын хасил иткән башҡорт ҡәрҙәштәре лә тап шул ләҡәп буйынса, уның кешеләре рәүешендә, ләҡәбенә исем яһаусы **–с** ялғауы ҡушылып, Тоб Аға**-сы** (тобағасы, табғас, табғач) тип йөрөтөлгән дә ырынлы ядкәрташҡа ла шулай яҙылған, тигән фараз әҙәбиәттә ныҡынған. Шул уҡ ваҡытта ырын яҙыуҙарҙағы “утбғч” йәки “тбғч” һүҙен “утбағыусы” тип уҡыу алымы ла билдәле, был юлдарҙың авторы ла шул алымды ҡуллана. Табғастарҙың тәүге быуын ғүмерендә улар империяның ҡытай этнослы чиновниктарын, дер-һелкетеп, тап сяньби-үҫәргәнсә (төркисә) һөйләшергә, кейенергә, аш-һыу яраштырырға һәм йола тоторға мәжбүр иткәндәр, император һарайында “үҫәргәнлек” шәп модаға әүерелгән. Әммә сяньби-үҫәргәндәр (йәки табғастар) был дәүләт халҡының егерме процентын ғына, ә ҡытайҙар һикһәнен тәшкил иткәнлектән, өсөнсө быуын ғүмерендә үк төркиҙәр ҡытайға әүерелгәндәр ҙә Төрки ҡағанатының ҡан дошмандарына әйләнгәндәр...

Иҫкәртмәләр:

[12] Был атама (утбғч) әле һүҙ барған ядкәрташтарҙа ғына сағылып, тикшереүселәр тарафынан дөрөҫ уҡылмай, минеңсә.
[13] Тарихи әҙәбиәттә Тан.
[14] Сяньби (үсен-би йәки үсер-би, сәрби) – көнсығыш үҫәргәндәрҙең бер өлөшө; Тоба (хәҙерге Тува) төбәгендә уҡмашып йәшәгәнлектән, “тоба” тип тә йөрөтөлгәндәр.

“Сяньби”ҙарҙың ысынлап та Үҫәргән башҡорттары икәнлеген күргәҙмәле дәлилләүсе бик һирәк һәм ҡиммәтле һүрәтте тамаша иттертәйек (ул тап Ҡытайҙы яулап алып хаҡимлыҡ ҡылыусы сяньби-үҫәргәндәр тарафынан эшләнеп, Ҡытайҙа һаҡланып ҡалған). Тимер көплө яу юрғала-рында йән-фарман елеп барыусы ике яугирҙең һул ҡулында дәүләт тыуҙары (флагтары) елберҙәй: береһен – осо дүрт тармаҡлыһын – дәүләттең дүрт юл башлығы хан тотҡан; икенсеһен – биш тармаҡ-лыһын, Үҫәргән ҡәбиләһенең биш ырыу-ара башлығы бей елберҙә-тә. Ә иң мөһиме -- башҡортлоҡтоң сағыу билдәһе – хандың *уң ҡулындағы* ***ҡурай!***

Бына ҡайһы замандарҙан уҡ телдән-телгә килеп етеп, хәҙер инде “Ҡаһым түрә” тип аталған йырыбыҙға күсерелеп, рухыбыҙға ҡеүәт бирә ул ҡурай! Әгәр “Ҡаһым” урынына “Тобағай” (Тоба-ағай”) тип йырлаһаҡ, йәбешә лә ҡуя үҙенә:

Тоба-ағай менгән һоро юрғаның, вай, кем,
Маңлайында булыр урайы.
Тоба-ағай фарман биргән саҡта, вай, кем,
***Уң ҡулында булыр ҡурайы.***

Бер нәмә лә юҡтан бар булмай һәм барҙан да юғалмай!

Шуны иҫкәртеү мөһим: бабаларыбыҙҙың Өргөн – Инәсәй (Орхон – Енисей) ташъядкәрҙәрен башлап өйрәнеүсе сит ил, шулай уҡ Рәсәй ғалимдары, төрки

(шул иҫәптән башҡорт) телдәрен белеп еткермәүҙәре арҡаһындалыр, текстарҙағы ***әсә (әчә)*** һүҙен яп-яңылыш ***ир енесе*** атамаһына ҡайтарып ҡалдыралар, ә төрки авторҙар шуларҙыҡын ҡабатлай. Ләкин төрки (шул иҫәптән башҡорт) телдәрҙә ***әжә -- әсә -- әчә*** һүҙҙәре, билдәле ғалим йөмләһе менән урыҫсалатып әйткәндә, түбәндәгеләрҙе аңлата:

1. Мать.

2. Королева.

3. Старшая сестра.

4. Тетка, тетя.

5. Бабка, бабушка.

6. Супруга, жена.

7. Женщина. (Э.В. Севортян. Этимологический словарь тюркских языков. М., 1974. 232 – 233-сө биттәр). Былар иһә ырын текстарындағы шул атамаларҙы һәм ошо хеҙмәт авторының иҫкәртеүҙәрен дөрөҫ аңлай белергә ярҙам итер.

Иң аҙаҡтан Оло Яҙыу һәм Кесе Яҙыу текстарының хәҙерге башҡорт әҙәби телендә иркен күсерелеше бирелә.

* * *



Памятник в честь Кюль-Тегина на берегу р. Орхон в Кошо-Цайдаме (Монголия).

## Ташъядкәрҙәрҙәге иҫке төрки ырын яҙмаларының дөйөм алфавиты:



ДРЕВНЕТЮРКСКИЙ РУНИЧЕСКИЙ АЛФАВИТ

| Начертание | Значение | | Начертание | Значение | |
|---|---|---|---|---|---|
| | русск. | лат. | | русск. | лат. |
| | а, ä | a, ä | | ñ | ñ |
| | б$^{1}$ | b$^{1}$ | | нт | nt |
| | б$^{2}$, ä | b$^{2}$, ä | | нч | nč |
| | ҕ | γ | | о, у | o, u |
| | г | g | | ö, ӱ | ö, ü |
| | д$^{1}$ | d$^{1}$ | | п | p |
| | д$^{2}$ | d$^{2}$ | | ρ$^{1}$ | r$^{1}$ |
| | з | z | | ρ$^{2}$ | r$^{2}$ |
| | ы, i | y, i | | с$^{1}$ | s$^{1}$ |
| | j$^{1}$ | j$^{1}$, ĭ | | с$^{2}$ | s$^{2}$ |
| | j$^{2}$ | j$^{2}$, ĭ | | т$^{1}$ | t$^{1}$ |
| | k | q | | т$^{2}$ | t$^{2}$ |
| | к | k | | ч | č |
| | л$^{1}$ | l$^{1}$ | | ш | š |
| | l$^{2}$ | l$^{2}$ | | | |
| | лт | lt | | q | |
| | м | m | | | |
| | н$^{1}$ | n$^{1}$ | | | |
| | н$^{2}$ | n$^{2}$ | | | |
| | ӊ | ŋ | | | |

Мин был ырындарҙы уҡыуҙа, күпселеккә аңлайышлы булһын өсөн, урыҫ ғалимдары (һәм уларға эйәреп төрки ғалимдар) эш иткән ошо тәүге дөйөм алфавитты ҡулланғайным, шуға күрә унда, башҡорттоҡонан башҡа, дөйөм төрки өндәре генә бар. Әммә хәҙерге заман фәне бер килке ырын-хәрефтәрҙең тап башҡорт өндәре (һ, ҫ, ҙ, с, ң) рәүешендә лә уҡылырға тейешлеген раҫланы, минән һуңғылар ошо форсаттан файҙаланыр тип уйлайым. Әлегә шул үҙенсәлектәрҙең беҙҙең өсөн иң мөһимдәрен күрһәтәм:




Тимәк, был яҙма ҡомартҡыларыбыҙҙы киләсәктә ауыҙ тултырып саф башҡортса уҡый алабыҙ.

## 1. КӨЛИ-ТУҒАНҒА АРНАЛҒАН ЯДКӘР (ОЛО ЯҘЫУ)




**(1) үзә күк : тңры : срә : йғз : йр : ҡылнтуҡдә : кынрә : кысы : оғлы : ҡылнмс : кысы : оғлынтә : үзә : чүмпәм : Бомн ҡғн : ыстымы ҡғн : олрмш : олрпн : түрк : боднң : ылын : түрүсын : утоутә :бырмс : ынты : бырмс :**

(1) Өҫтә Күк : Тәңре, : аҫта Көрән Ер : ҡылынғанда : ике арала : кеше : улы : ҡылынмыш. : Кеше : улынан : өҫтә : әсәм-апам (Һыу-Һауа) : Быуман-каған, : Истәми [Ис-те-ми] (Әсә-Ата-би) [Оләсә-Йәнбикә, Олата-Йәнбирҙе][1] ҡаған: ултырмыш. : Ултырып, : төрк бөтөндөң (бөтөн төркиҙәрҙең) : илен, : турыһын (ҡанунын) : тота : бирмеш : ине. : Бирмеш :

[1] Ис = Оләсә-Йәнбикә, те-ми (ата-би) = Олата-Йәнбирҙе – “Урал батыр» эпосындағы тәүбабалар.

(1) Наверху Небо-Тенгри, внизу Зеленая Земля когда были сотворены, в промежутке этих двоих был сотворен человеческий сын. Выше человеческого сына – Ас-Аба (Вода-Воздух) Быуман-каган, Истеми (Аса-те-ми) каган (Бабушка-Янбике, Дедушка Янбирде) сидели...



**(2) түрт : болӊ : ҡоп : йғырмс : сүсүлпн : түрт : болӊдҡы : боднғ : ҡоплмс : ҡопбз : ҡылмс : бшлғғ : йкнтрмс : тызчгг : сүкүрмс : ылгрү : ҡдрҡн : йышкә тгы : кырү : тмрҡығҡә тгы : уҡонтрмс : кынрә**

(2) дүрт : булындығында (тарафында) : күп :яу (дошман) имеш. : Сү (ғәскәр) һуғыштырып, : дүрт : булындығындағы : бөтөндәрҙе (халыҡтарҙы) : күп алмыш, күп боҙоу : ҡылмыш, : башлыларын : йөгөндөртмөш, : теҙлеләрен : сүктермеш. : Алғараҡ (көнсығышҡараҡ) : Ҡыҙырған : йышҡа (юшауға, үләнлеккә) тиклем, : кирегә -- : Тимерҡапҡаға тиклем : ҡундырмыш (ғәскәрен). : Ике арала



**(3) ыды оҡсз күк : түрк : нчә : олрор рмс : былгә ҡғн рмс : лп ҡғн рмс : бойруҡысмә : белгә : рмс рнч : лп рмсрнч : бглрыймә : бодныймә : түзрмс : ны үчүн : ылг : нчәутоутмс : рнч : ылгутоутп : түрүг : ытмс : үзынчә :**

(3) ине үкһеҙ күк төрк. : Анда : ултырыр имеш : Белге : ҡаған [16] имеш, : алып ҡаған имеш, : бойороҡтары йәнә : белекле : имеш бит, : алып имеш бит. : Бәкләре йәмғеһе, : бөтөнө (халҡы) йәмғеһе : төҙ (тоғролоҡло) имеш : аның өсөн, -- : илен : шулай тотмош : бит, : илен тотоп : хөкөм : итмеш; үҙенсә (үҙ үлеме менән)



**(4) кргк : болмс : йғчы : сығутчы : үӊрә : күн : утоғсҡдә : бүклы : чүлгл : утбғч : тупут : пр : порм : ҡырҡз : үчуҡорыҡн : оутз утутр : ҡыутн : утутбы : бончә :**

**бодн : клпн : сығутәмс : йоғләмс : нтғ : күлг : ҡғн рмс : нтә кысрә : ынсы : ҡғн :**

(4) кергәк (гүр эйәһе) : булмыш. :Юҡлаусылар : һыҡтаныусылар : шунда : көн тыумыштан (көнсығыштан) : мүкле сүддәгеләр, : утбағыусы (Ҡытай), : тибет, : абар, : бурум (Рим), : ҡырғыҙ, : өс уғыр хан, : ватасы (ватыусы) ут атар [17], : ҡатай-көҙән, : татабы [18] -- : барса : бөтөн (халыҡ) : килеп : һыҡтанмыш, : иламыш. : Шундай : көйлө (шәп) : ҡаған имеш. : Анда һуңыраҡ : энеһе : ҡаған :

Иҫкәртмәләр:

[15] Төрк – Тороҡ (Тора) тау хоҙайы Тәңрегә (фаллосҡа) табыныусы башҡорттар, улар менән 922 йылда Башҡортостан тупрағында ғәрәп илгиҙәре Ибн-Фаҙлан да осрашҡан.

[16] Белге ҡаған йәки Төрк Белге ҡаған – Илтиреш ҡағандың һуңғы маҡтаулы ләҡәбе.

[17] Ватасы ут атар – бәғзеләр быны "утыҙ татар" тип уҡый. Минеңсә, был – ватҡыс артиллериянан ут атып һуғышыусы айырым ҡытай, йәки вьетнам иле булһа кәрәк.

[18] Татабы – татар.



**(5) болмс рнч : оғлыутә : ҡғнболмс рнч : нтә кысрә : ынысы : чысынтг : ҡылнмдуҡ рнч : оғлы : ҡңынтг : ҡылнмдуҡ рнч : былгсын : ҡғн : олрмс рнч : йблҡ : ҡғн : олрмс рнч : бойруҡы : ймә : былгсн рнч : йблк рмс рнч :**

(5) булмыш бит, : улы ла : ҡаған булмыш бит. : Анда һуңыраҡ : энеһе :әсәһендәй [19] : ҡылынманы (булманы) бит, : улы : ҡаңындай (ханындай -- атаһындай [20]) : ҡылынманы (булманы) бит, :белекһеҙ : ҡаған : ултырмыш бит, : ябалаҡ (яман) : ҡаған : ултырмыш бит, : бойороғо : йәнә : белекһеҙ ине бит -- : яман имеш бит. :



**(6) бглры : бодны : түзсз : үчн : утбғч бодн : тблгын : күрлг : үчүн : рмҡчысын : үчүн : ынлы : чылы : кы[ң]сүрткын : үчүн : бглы : боднлғ : йоңшорутуҡын : үчүн : түрк : бодн : ылллдк : ылын : ы[чғ]но : ыдмс :**

(6) Бәкләре, : бөтөнө (халҡы) : төҙһөҙ (тоғролоҡһоҙ) : (булғаны) өсөн, : утбағыусы (Ҡытай) бөтөнө (халҡы) : ярығыбыҙҙы : күрә алғаны : өсөн, : арбаҡлағаны : өсөн, : энеле : -әсәле (барыһы) : ханға (ҡаршы) һуғышҡаны [21] : өсөн, : бәкле :бөтөнлөгөн : йомшартҡаны : өсөн : төрк : бөтөн (халҡы) : иләүләнгән : илен : (ҡулынан) ысҡынды : итмеш (ысҡындырҙы), :



**(7) ҡғнлдуҡ : ҡғнын : йытрү : ыдмс : утбғч : боднкә : бглк : орыоғлын : ҡол болты : сылк : ҡызоғлн : күң болты : түрк : бглр : түрк әутын : ыуты : утбғчғы : бглр : утбғч : әутын : утоутпн : утбғч : ҡғнҡә**

(7) ҡағанланған : ҡағанын : йотторҙо : итмеш, : утбағыусы (Ҡытай) : бөтөнгә (халыҡҡа). : Бәклек, :ир-уғлан : ҡол булды, : һылыу : ҡыҙ-уғлан : күң (күңдәм хеҙмәтсе) булды, : төрк : бәкләре : төрк : атын (исемен) : юйҙы (әйләндерҙе) : утбағыусыға (ҡытайға); : бәкләр : утбағыусы (ҡытай) : атын (исемен) : тотоп, : утбағыусы (ҡытай) : ҡағанға

Иҫкәртмәләр:

[19] Йәғни атаҡлы үгәй әсәһе – Белге Утан Уҡымышлыһыһындай.

[20] Йәғни Илтиреш ҡағанға.

[21] Илтиреш ҡағанға тиклемге “ябалаҡ” (ямаҡ) ханды уға ҡаршы баш күтәреүселәр үлтереп, халыҡ Ҡытай ҡулы аҫтына ыға.



**(8) күрмс : лгйыл : ысг күчг : бырмс : ылгрү : күн : утоғсҡдә : бүклы : ҡғнҡә : тгы : сүлйү : брмс : уторғры : тмрҡпғҡә : тгы : сүлйү : бырмс : утбғч : ҡғнҡә : ылын : түрүсын : лыбырмс : түрк : ҡрә : ҡмғ :**

(8) күрер имеш (ҡарар имеш). : Илле йыл : эҫе көсөн : бирмеш. : Алғары : көн :тыуышҡа (көнсығышҡа) -- : Мүкле : ҡағанға : тиклем : һуғышып : бармыш, : ултыраҡлы : Тимерҡапҡаға : тиклем : һуғышып : бармыш, : утбағыусы (ҡытай) : ҡағанға : илен, : турыһын (ҡанунын) : алып бармыш. : Төрк ҡоро : күмәк :



**(9) бодн : рчә тымс : ыллг : боднртм : ылм : мутыҡны : кмкә : ылг : ҡзғнормн : тыррмс : ҡғнлғ : бодн : ртм : ҡғнмҡны : нә ҡғнҡә : ысг күчг : бырүрмн : тыррмс : нчә тып : утбғч : ҡғнҡә : йғы болмс :**

(9) бөтөн (халыҡ) -- : ир-әсә әйтмеш: : “Илле (дәүләтле) : бөтөн (халыҡ) инем, : илем : өмөтө ҡанә (ҡайҙа)? : Кемгә : иллелек (дәүләтселлек) : ҡаҙанырмын? -- :

тир имеш. -- :Ҡағанлыҡлы : бөтөн (халыҡ) : инем, : ҡағаным ҡанә (ҡайҙа)? : Ниндәй ҡағанға : эҫе көсөмдө : бирермен?!" – тир имеш. : Анса (шулай) тип, : утбағыусы (ҡытай) : ҡағанға : яу (дошман) булмыш. :



**(10) йғы болп : ытнү : йрутоно : омдуҡ : йнә : ычҡмс : бончә : эсг күчг : бырткгрү : сҡнмуты : түрк : бодн : үлүрйын : орғсрутйын : тыррмс : йоҡдо : брыр : рмс : үзә : түрк : тңрысы : түрк ыдуҡйыры :**

(10) Яу булып, : этенеп, : йортонда : өмөтһөҙлөк : йәнә : сикмеш. : Барса : эҫе көсөн : бирә тороп, : ысҡынманы (азат булманы). : Төрк : бөтөн (халҡы) : "үләйем, : ырыуымды серетәйем", : тир имеш, :юғалыуға : барыр : имеш. : Өҫтә : төрк : Тәңреһе, : (аҫта) төрк изге Ере :



**(11) собы : нчә тмс : түрк : бодн : йоуҡ : болммзон : тыйн : бодн : болчон тыйн : ҡңм : ылтрс ҡғнғ : үгм : ылбылгә ҡутонғ : тңры : тупсынтә : уҡоуҡп : йүгрү : күтүрмсрнч : ҡңм ҡғн : йыты йгрмы : рн : утшҡмс : утшрә :**

(11) Һүҙен : анса (шулай) әйтмеш: : "Төрк : бөтөн (халҡы) : юҡ : булмаһын! -- : тиеп. -- : Бөтөн (халыҡ) :булһын!" – тиеп. : Ҡаңым (ханым -- атам) : Илтиреш ҡағанды, : өгәм (үгәй анам) Ил Белге ҡатынды [22] : Тәңре : түбәһендән : ҡағып : (һөйөп) юғары : күтәрмеш бит! : Атам ҡаған : егерме ете : ир (менән) : (юл) үтә сыҡмыш, : үтешендә :



**(12) йорйор : тыйн :күсдп : блҡдҡы : утғҡмс : утғдҡы : ынмс : тырлп : йтмср бюолмс :тңры : күч быртк : үчн : ҡңм ҡғн : сүсы : бүрытг : рмс : йғысы : уҡонтгрмс : ылгрү : уҡорғро : сүлп : тырмш : ҡобрутмш : ҡмғы :**

(12) (уның хаҡта), өйөр-өйөр : төйнәй: күс, тип : ишетеп, : балыҡтағылар (ҡалалағылар) : тауға ыҡмыш (ағылмыш), : тауҙағылар : инмеш (төшмөш); : тирелеп (йыйылып), :етмеш ир булмыш. : Тәңре : көс : биргәне : өсөн, : ханым (атам) ҡаған : һуғышсылары : бүреләй : имеш, : дошмандары : ҡуйҙай имеш. : Алға (көнсығышҡа) ҡарай, : кирегә (көнбайышҡа) ҡарай : ғәскәрен йөрөтөп : тирмеш (халҡын йыймыш), : күп ир итмеш. : Күмәге :



**(13) йты йз р : болмс : йты йүз р : болп : лсрмс : ҡғн срмс : бодңғ : күңдмс : уҡол дмс : бодңғ : түрк : түрүсүн : ычғнмс : бодңғ : чүмпәм : түрүсынчә : йрутмс : түлыс : утрдош :**

(13) ете йөҙ ир : булмыш, : ете йөҙ ир : булып : алышырмыш (дошман менән алышҡандар). : Ҡаған аҫрамыш : бөтөндө (халыҡты), : (ошоғаса Ҡытайға) күңдәм хеҙмәтсе тигән, : ҡол тигән : бөтөндө (халыҡты), : төрк : турыһынан (ҡанунынан) : ысҡынмыш : бөтөндө (халыҡты) : әсәм-апам [23]: турыһынса (ҡанунынса) : йөрөтмөш. : Төләстә [24] : утырҙыш (ултырыш). :



**(14) йбғоғ : шдғ : нтә : брмс : брйә : утбғч : бодн : йғы рмс : йырйә : бз ҡғн : утуҡоз оғз : бодн : йғы рмс : ҡырҡз : уҡорыҡн : оутз утутр : ҡыутн : утутбы : уҡоп : йғы рмс : ҡңм ҡғн : бончә**

(14) Ябағаһы (ябайҙары), : саты (хан тоҡомдары) : анда (шунда) : бармыш. : Бирелә (көньяҡта) : утбағыусы (Ҡытай) : бөтөн (халҡы) : яу (дошман) имеш. : Арыла (төньяҡта) : Абыз ҡағандың : туғыҙ уғыҙ [25] : бөтөнө (халҡы) : яу (дошман) имеш. : Ҡырғыҙ, : уйғыр хан, : ватасы (ватыусы) ут атар, : ҡатай-көҙән, : татар -- : күп : яу (дошман) имеш. : Ҡаным (ханым -- атам) ҡаған : быларға (ҡаршы)

Иҫкәртмәләр:

[22] Өгәм (үгәй анам) Ил Белге ҡатынды – был юлдарҙы яҙыусы Юллыҡ-туған уны, Белге Утан Уҡымышлыһын, Ил Белеге тип кенә исемләй. Илтиреш ҡаған, үҙе яу юлында саҡта өйҙә ҡалған ҡатыны вафат булғанын ишетеп, уны ерләргә ҡайтып китә (Белге Утан Уҡымышлыһы яҙған ядкәрҙең 31-енсе юлын ҡарағыҙ). Ә инде был ядкәрҙең ошо 11-енсе юлына ҡарағанда, тол ҡалмыш Илтиреш ҡаған үҙенең данлы ғәскәр башлығы һәм кәңәшсеһе, ике туған апаһы (старшая сестра) Белге Утан Уҡымышлыһына өйләнгән булырға тейеш; ә тәүге ҡатынынан тыуған улы Юллыҡ-туғанға (был ядкәрҙең авторына) ул ысынлап та “өгәм” (үгәй анам) булып сыға.

[23] Йәғни үгәй әсәһе (апаһы) Белге Утан Ўкымышлыһы төҙөгән ҡанун.
[24] Төләс – Талас, хәҙерге Ҡырғыҙстандағы ҡала.
[25] Туғыҙ уғыҙ – Күбәләк-Тиләү башҡорттары бабаларының туғыҙ ырыулы ҡәбилә берлеге.



**(15) ҡырҡ : рутуҡы : йты : йолы : сүлмс : йгрмы : сүңс : сүңсмс : тңры : йрлҡдуҡ : үчүн : ыллгг : лсртмс : ҡғнлғғ : ҡғн : срутмс : йғығ : бз ҡылмыс : тызлгг : сүңүрмс : бшлғғ : йүкнтүр**

(15) ҡырҡ артығы ете (йәғни 47) : юлы (тапҡыр) : һуғышҡа йөрөмөш, : егерме : һуғышта : һуғышмыш. : Тәңре : ярлыҡағаны : өсөн : иллеләрҙе : илһеҙ итмеш, : ҡағанлыларҙы : ҡағанһыҙ итмеш, : яуҙарҙы : боҙа ҡылмыш (ҡыйратмыш), : теҙлеләрҙе : сүктермеш, : башлыларҙы : йөгөндөрмөш.



**(16) түрүг : ҡзғнп : очә : брмс : ҡңм : ҡғнҡә : бшлйо : бзҡғнғ : блбл : тыкмс : олтүтүдә : үзә : чым ҡғн : олурты : чым ҡғн : олрпн : түрк : бoднғ : йычә : ытды : ыгты : чығнғ**

(16) (Атам шулай) турылар (ҡанундар) : ҡаҙанып : оса (вафат була) : бирмеш. : Ханым (атам) ҡағанға : (дошманыбыҙ) башлайы (башлығы) : Абыҙ ҡағанлы : балбалдар (тораташтар) : тегелмеш (ҡуйылмыш). : Ул турыла (ҡанунда) : өҫтә -- : әсәм, ҡаған : ултыра [26]. : Әсәм, ҡаған, : (икеһе бергә) ултырып, : төрк бөтөндө (халҡын) : йәшә : итте (йәшәтте), : икте (сәсте) : сығанаҡ (йәшәү сығанағы).





**(17) чым ҡғн : олрутуҡдә : үзм : утордош : бодн : үзә : щдртм : чм ҡғн : бырлә : ылгрү : йшл үгз : шнтоң : йзыҡә тты : сүлдмз : уҡорғро : тмрҡпғҡә : тты : сүңдмз : күгмн : шә : ҡы**

(17) Әсәм, ҡаған : ултырғанда : үҙем : тордош : бөтөн (халҡы) : өҫтөндә : сат (солтан) инем. : Әсәм, ҡаған : (менән) бергә : алғары (алдағы, көнсығыштағы) : Йәшел ыуыҙҙағы [27] : Шантуң [28] : яҫылығына тиклем : ғәскәр илттек беҙ, : уйғыр ҡырына, : Тимерҡапҡаға : тиклем : һуғыштыҡ беҙ, : Күгмән [29] : аша : килеп



(18)

**(18) ҡмғы : быш оутз : сүлдмз : үч йгрмы : сүңшдмз : ыллг : ылсртдмз : ҡғнлғғ : ҡғнсрүтдмз : тызлгг : сүкртмз : бшлғғ : йкүнтртмз : түргс : ҡғн : түркмз**

(18) күмәге : утыҙ биш (тапҡыр) : ғәскәр илттек беҙ, : егерме өс (тапҡыр) : һуғыштыҡ беҙ, : иллеләрҙе : илһеҙ иттек беҙ, : теҙлеләрҙе : сүктерҙек беҙ, : башлыларҙы : йөгөндөрҙөк беҙ. : Төргөш : ҡаған : (үҙ) төркөбөҙ



(19)

**(19) үчүн : бызңә : йңлуҡын : үчүн : ҡғны : үлты : бойруҡы : бглры : ймә : үлты : онуҡ : бодн : мгк : күрты : чүмз : пәмз : утоутмс : йыр соб : ыдсз : болмзон : тыйн : збоднғ : ытп : йр**

(19) (булғаны) өсөн, (шулай була тороп та) беҙгә (ҡарата) яңылышлығы : өсөн : ҡағаны үлде, : бойороғо (бойороусы вәзире, премьер-министры), : бәкләре : йәнә : үлде. : Ун уҡ : бөтөн (халҡы) : имгәк : күрҙе. : Әсәбеҙ:-апабыҙ: тотмош [30] : Ер-Һыу эйәһеҙ : булмаһын : тип, : аҙҙы (аҙ һанлыны) бөтөн (халыҡ) : итеп : яратыусы

Иҫкәртмәләр:

26 Белге Утан Уҡымышлыһы менән Илтиреш ҡаған берлектә идара итеүенә ишара.

27 Йәшел ыуыҙҙағы – Йәшел йылғалағы, хәҙерге Ҡыуанһыу (Хуанхэ).

28 Шантуң – хәҙерге Пекин янындағы ҡала.

29 Күгмән – Күк Ирәндек (Көньяҡ Ирәндек) тауы.

30 Белге Утан Уҡымышлыһы сығарған ҡанундар буйынса йәшәүсе.



(20)

**(20) брс бг : рты : ҡғнут : бөнтә : быз : быртмз : сыңлм : уҡончйоғ : бртмз : үзы йңлты : ҡғны үчты : бодны : күңуҡол : болты : күгмн : йыр соб : ыдсз : ҡлмзонтыйн : зҡырҡз : боднғйрут**

(20) Барс бәк : ине. : Ҡаған атын (исемен) : бында (уға) беҙ : бирҙек беҙ, : (уға) һеңлем : кесеһен (кесе һеңлемде): бирҙек беҙ. : Үҙе яңылышты -- : ҡағаны осто (вафат булды), : бөтөнө (халҡы), : күңдәмдәре ҡол : булды. : Күгмән : ер-һыуы [31] : эйәһеҙ : ҡалмаһын тип, : аҙғын ҡырғыҙ : бөтөн (халҡы) йортона



(21)

**(21) йнә : быртмз : лгрү : ҡдрҡн : йшғ : шә : боднғ : нчә уҡонторутмз : нчә ытдмз : уҡорғро : кңүутрмнҡә : тты : түрк : боднғ : нчә уҡонтрутмз : нчә тдмз : олүдкә : уҡол : уҡоллғ : болмс : рт**

(21) йәнә барҙыҡ беҙ. : Алғары (көнсығыштағы) : Ҡыҙырҡан : юшығы (үләнлеге) : аша (уҙып), : бөтөнөһө-нисә (күпме) көн торҙоҡ беҙ, : нисә (ни саҡлым) үттек беҙ! : Кирегә (көнбайышка ) ҡарай : Киң Үтәрмәнгә : тиклем : төрк бөтөндө (халҡын) : шунса (киңлеккә) ҡундырҙыҡ (еректерҙек) беҙ, : шунса тотоҡ беҙ, : ул ваҡытта : ҡол : ҡоллоғон : белмәç : ине. :



(22)

**(22) нчә ҡзғнмс : ытмс : лмз : түрүмз : рты : түрк : оғз : бглры : бодн : сдң : үзә тңры : бсмср : срәйыр : тлнмср : түрк : бодн : лңн : түрүнң : кмрутуты**

(22) Шунса ҡаҙанмыш : итмеш -- : илебеҙ, : турыбыҙ (ҡанунвбыҙ) : (бар) ине. : Төрк, : уғыҙ бәкләре, : бөтөнө (халҡы) : ишетегеҙ! : Өçтән Тәңре : баçмаһа, : аçтан Ер : теленмәһә, -- : төрк : бөтөн (халҡы), : (һинең) илеңде, : турыңды (ҡануныңды) : кем арытты?!



**(23) үкүн : күргүңн : үчүн : ыгдмс : былгә : ҡғнңә : рмсбрмс : дгүлң[ә]кнтү : йңлтғ : йблҡ : кыгүртг : йрклғ : ҡнтн : клп : йнә лтды : сүңглг : ҡнтн : клпн : сүрәлтды : ыдуҡүткн : йы[ш]**

(23) Үкен! : Кирелегең : өсөн (менән) : игелекле : Белге : ҡағаныңа : ҡаршы барып, : изге илеңә ҡандай (ниндәй) : яңылышлыҡ, : яманлыҡ : килтерҙең! : (Һуғыш) яраҡлылар : ҡайҙан (булһа ла) килдеме, : йәнеңде ала иттеме (алдымы), : һөңгөләләр : ҡайҙан (булһа ла) : килдеме, :сураны (бала-сураны) ал иттеме (алдымы)? : (Утбағыусыға – Ҡытайға хеҙмәт итеп,) изге Үтәкән : йыш (юшауына, үләнлегенә)



**(24) брдғ : уҡорығро : брғмә : брдғ : брдуҡ : йырдә : дгүг : олрнч : ҡнң : : собчә : йүгрты : сүңкүң : утғчә : йутды : бглк : оры оғлң : уҡол : болты : слк ҡыз оғлң : күң болты : былмдк үчүн**

(24) барҙың, : кирегә (көнбайышҡа) ҡарай : барыуға : барҙың, : барған : ерҙә : гелән : шул (ине) бит: : ҡаның : һыуса (һыуҙай) : йүгерҙе (аҡты), : һөйәгең : тауҙай : ятты, : бәклек : ирең, улың : ҡол : булды, : һылыу ҡыҙ, улың : күңдәм булды. : (Шуларҙы) белмәлек (белдерер) өсөн



**(25) бшлйо : ҡрҡз ҡғнғ : блбл : тыкдм : түрк : боднғ : утыкүсы : йуҡ болмзон : тыйн : ҡңм ҡғнғ : үгм ҡутонғ : күтрмш : тңры : ылбыргмә тңры : түрк : бодн : утыкүсы : йуҡ бо[л]**

(25) (дошманыбыҙ) башлығы : ҡырғыҙ ҡағанлы : балбалдар (тораташтар) : тектем (ергә). : Төрк : бөтөндөң (халҡының) : аты (исеме), күсе : юҡ булмаһын, : тиеп, : ҡаным (атам) ҡағанды [32], : өгәм [33] (угәй анам) ҡатынды [34] :

күтәрмеш : Тәңре, : ил биргән Тәңре: : “Төрк : бөтөндөң (халҡының) : аты (исеме), : күсе : юҡ булмаһын, : тип, :


(26)

**(26) ҡғн : олрутды рнч : нң йылсғ : боднкә : олрмдм : ычрә : шсз : утшрә : йбз йблҡ : боднтә : үзә : олрутм : ынм : күлтыгн : бырлә : сүзлшдмз : ҡңмз : чмз : ҡз**

(26) (мине лә) ҡаған (итеп) : ултыртты бит. : Аның йәлсегән : бөтөнөнә (халҡына) : ултырманым, : эсендә : ашһыҙ, : тышында : тунһыҙ : яуыз-яман : бөтөндөң (халыҡтың) : өҫтөнә : ултырҙым. : Энем : Көлитуған : (менән) бергә : һөйләштек беҙ: : “ҡаңыбыҙ (атабыҙ), : әсәбеҙ : ҡаҙанышын (юғалтмайыҡ)!” –

Иҫкәртмәләр:

[31] Күгмән ер-һыуы – Күк Ирәндек ер-һыуы – Төрки ҡағанаттың ҡағандар тоҡомон башлаусы Әсинә (Үҫәргән) башҡорттарының тыуған төйәге.

[32] Илтиреш йәки Төрк Белге ҡағанды.

[33] Өгәм – үгәйем, ә был осраҡта “үгәй анам” тигән һүҙ.

[34] Белге Утан Уҡымышлыһын.


(27)

**(27) тыйн : түрк : бодн : үчүн : түн одммдым : күнтз : олрмдм : ынм : күлтыгн : бырлә : кыщд : бырлә : үлүйытү : ҡзғнтм : нчә ҡзғнп : быркы : боднғ :**

(27) тиеп. : Төрк бөтөн (халҡы) : өсөн : төн йоҡламаным, : көндөҙ : ултырманым, : энем : Көлитуған : (менән) бергә, : ике сат (хан тоҡомо) : (менән) бергә : оло етешлекте : ҡаҙандым. : Шунса ҡаҙанып, : (хатта) бер-ике генә : бөтөнгә лә (халыҡҡа ла) : ут-һыу (зыяны) : ҡылманым. : Мин


(28)

**(28) брмш : бодн : үлү йытү : йдғн : йлңн : йнә улты : боднғ : ыгдйын : тыйн : йырғро : оғз бодн : утпә : ылгрү : ҡыутн : утутбы : бодн : утпә : быргрү : утбғчутпә : олғсү : кыйгр**

(28) бармыш (барған) : бөтөн (халыҡ) : үлергә етешеп, : йәйәүлеһе, : яланғасы : янымa килде. : “Бөтөнөмдө (халҡымды) : игелекләйем!” -- : тип, : йырағырак (төньяҡтараҡ): уғыҙ бөтөнгә : үттем, : алғараҡ (көнсығыштараҡ) : ҡатай-көҙән, : татабы (татар) : бөтөндәренә (халыҡтарына) : үттем, : бирегәрәк (көньяҡтараҡ) утбағыусыға (Ҡытайға) үтеп, :оло һуғыш : егерме ике (тапҡыр)



(29)

**(29) кысрә : тңры : йрлҡзо : уҡоутм : бр үчүн : үлүгм : бр үчүн : үлтчы : боднғ : тыргрү : ыгтм : йлң боднғ : утонлғ : чығн : боднғ : бйтылтм : збоднғ : үкшҡылутм : ығрллгдә :**

(29) кисерҙем. : Тәңре : ярлыҡаны: : ҡотом : бар өсөн, : өлгөм : бар өсөн : үлеүсе : бөтөндө (халыҡты) : тергеҙеүле : иттем, : яланғас бөтөндө (халыҡты) : тунлы (иттем), : юҡсыл : бөтөндө (халыҡты) : байыттым, : аҙ бөтөндө (халыҡты) : ҡуш (ишле) ҡылдым. : Уғыры (уйғыр) иллегендәге :



(30)

**(30) боднғ : уҡоп : бз ҡылтм : йғсыз : ҡылтм : уҡоп : мңә : күрты : ысг күчг : бырур : бончә : кргкболты : ҡңмҡғн : очдуҡдә : ынм : күлтыгн : йы**

(30) бөтөнгә (халыҡҡа) : күп : боҙоу ҡылдым, : (уларҙы) яуһыҙ (ғәскәрһеҙ) : ҡылдым, : күбе : миңә : күрҙе (ҡараны, буйһондо), : эҫе көсөн : бирер (ине). : Шунса : хакимлыҡ : ҡаҙанып, : энем : Көлитуған : үҙенсә (үҙ үлеме менән) : гүр эйәһе булды. : Атам ҡаған : осҡанында (вафат булғанында) : энем : Көлитуған : ете (йәштә ҡалды).



(31)

**(31) омй тг : өгм : ҡутон : уҡоутңә : ынм : күлтыгн : рутболты : луты йгрмы : йшыңә : чым ҡғн : ылын : түрүсын : нчә ҡзғнты : лутычоб : соғдҡутпә : сүлдмз : боздмз : утбғч : оңутоутуҡ : быст**

(31) Һомайҙай : өгәм (үгәй анам) ҡатын [35] : ҡатында (янында) энем : Көлитуған : ир-ат булды [36]. : Егерме алты : йәшендә : әсәм (менән) ҡағандың : илен, : турыһын (ҡанунын) -- : шунса ҡаҙанышты : илтешеп, : Соғдҡа үтеп : һуғыштыҡ беҙ, : (уны) боҙҙоҡ беҙ, : утбағыусының (Ҡытайҙың) : уң тотоғон (уң флангыһын тотоусы ғәскәрен) : баҫтыҡ.



(32)

**(32) көлтыгн : йдғн : опл йотгды : оң утоутуҡ : йорчын : йрҡлғ : лгнутоутды : йрҡлғды : ҡғнкә : нчолды : олсүг : нтә йуҡҡышдмз : быр аутз : йшыңә : ччә[сң]үркә : сүңшдмз : ңлкы : утдҡнчорң : боз**

(32) Көлитуған : йәйәүләп : ап-алға тейҙе (ташланды), : уң тотоҡ : эйәрсенен -- : яраҡлыҡ (көп-ҡорал) : алғанын тотто, : яраҡлыны (көп-ҡораллыны) : ҡағанға : инселәне (бүләк итте). : Оло һуғышта : анда : (аларҙы) юҡ ҡылдыҡ беҙ. : Утыҙ бер : йәшендә : сәсә-сәңкемгә [37] (ҡаршы) : һуғыштыҡ беҙ, : иң алға : үткән осорҙа : буҙы (буҙ аты)

Иҫкәртмәләр:

[35] Ҡатын – ҡаған ҡатыны Белге Утан Уҡымышлыһы.

[36] Көлитуған батырҙы уның үгәй анаһы Белге Утан Уҡымышлыһы тәрбиәләп ир-ат ҡорона еткергән.

[37] Сәсә-сәңкемгә -- Үҫәргән ырыуының Әсә-Бүрегә табыныусы әсә тармағына.



(33)

**(33) үлты : кынты : ышбрә ймутр : боз утғ : бынп : тгды : олутнтә : үлты : үчнч : йгнсыл[г] : бгң : кдмлг : уторғут : бынп : тгды : ол утнтә : үлты : йркынтә : йлмсынтә : йүзрутуҡ : уҡонруты : йыз[кә] : бшыңә : бырт**

(33) үлде. : Икенсе (тапҡыр) : Эшбара Ямтарҙың : буҙ атын : менеп : тейҙе (ташланды), : ул аты ла үлде. : Өсөнсө (тапҡыр) : Йөгөн Һөлөк : бәктең : ике аҙымлыҡ (юрға) : туры атын : менеп : тейҙе (ташланды), : ул аты ла : үлде. : Ярағына (дошманына) : елмешендә : йөҙҙәрсә уҡ : ҡундыртты, : еҙле (еҙ кәпәсле) : башына : берәүе



(34)



(34A)

**(34) тгдкын : түрк : бглр : уҡоп былырсыз : ол сүг : нтә йуҡҡышдмз : нтә кысрә : йрбйрук[о] : олғркн : йғыболты : ныйнп : түргыйрғон : күлтә : боздмз : олғыркнзҡнә : рн : тзп : брды : күлтыгн : [алты отуз] :**

(34) тейгәнен : төрк : бәкләре : уҡып : белерһегеҙ. : Ул һуғышсыларҙы : анда юҡ ҡылдыҡ беҙ. : Анан һуңыраҡ : Ер-Байырҡа, : Оло-Иркен : (беҙгә) яу (дошман) булды. : Аны еңеп, : Түрге Йырғын : күлдә : (аларҙы) боҙҙоҡ беҙ. : Олоғ-Иркен аҙ ғына : ирен (һуғышсыларын) : теҙеп : барҙы. : Көлитуған : [утыҙ алты] :



(35)

**(35) йшыңә : ҡырҡз утпә : сүңдмз : сүңүг : бутмы : ҡырғ : сүкпн : күгмн : йышғ : утоғә : йорып : ҡырҡз : боднғ : одә : бсдмз : ҡғнын : бырлә : соңә йышдә : сүңшдмз : Күлитыгн : бйруҡон**

(35) йәшендә : ҡырғыҙға үтеп : һуғыштыҡ беҙ. : Һөңгө : бөтөмө (буйы) : ҡарҙы : сығып, : Күгмән (Күк Ирәндек) : юшауға (үләнлеккә) : үткәнсе : йөрөп, : ҡырғыҙ : бөтөнөн (халҡын) : йоҡлағанында : баҫтыҡ беҙ, : ҡағаны : менән : Сөң юшауҙа : һуғыштыҡ беҙ. : Көлитуған : Байырҡының [аҡ айғырына] :



(36)

**(36) бынп : оплйо : тгды : быр : рг : уҡн оруты : кырг : одшро : снчды : олтгдкдә : бйруҡонң : ҡдғрғ : одлҡын : сыйо : оруты : ҡырҡыз : ҡғнын : үлртмз : ылын : лутмз : олйлҡә : тү**

(36) менеп : ап-алға : тейҙе (ташланды), : бер : иргә : уғын орҙо (атты), : гүр эйәһе : итерлек : сәнсте. : Ул тейҙектә (бәрелешебеҙҙә) : Байырҡының : аҡ айғырының : ботон : сыя : орҙо (аттылар). : Ҡырғыҙ : ҡағанын : үлтерҙек беҙ, : илен : алдыҡ беҙ. : Ул йылда : То-

(37)



**(37) утоғә : ртс үгзг : кчә : йорыдмз : түргс : боднғ : одә бсдмз : түргс : ҡғн : сүсы : болчодә : оутчә : борчә : клты : сүңшдмз : күлтыгн : бшғобозут : бынп тгды : бшғобоз : к**

(37) утоҡҡа : Иртыш ыуыҙын (һыуын) : кисеп : йөрөнөк беҙ, : төргөш : бөтөндө (халҡын) : йоҡоһонда баҫтыҡ беҙ. : Төргөш : ҡаған : һуғышсылары : Болсала : ут : бөрсәһеләй : килде, : һуғыштыҡ беҙ. : Көлитуған : башҡа буҙатын : менеп тейҙе (ташланды), : башҡа буҙы : к...

(38)



**(38) утоутзут ... : кысын : үзылтзды : нтә йнә : кырп : түргс : ҡғн : бойруҡы : зутоутоғ : лгнутоутды : ҡғнын нтә : үлртмз : ылын лутмз : ҡрә түргс : бодн : уҡоп ылҡды : олбоднғ : [утбрдә] : ҡо**

(38) тотторҙо... : икеһен : үҙе алдырҙы. : Анда йәнә : кереп, :төргөш : ҡаған : бойороғон (бойороҡ үтәүсеһен), : аҙау [38] тотоғоноң : элеген (ҡулын – ярҙамсыһын) тотто. : Ҡағанын анда : үлтерҙек беҙ, : илен алдыҡ беҙ. : Ҡара төргөш : бөтөндө (халҡын) : [Табарҙа] : ҡу[ндырҙыҡ] (урынлаштырҙыҡ).

(39)



**(39) соғдҡ : бодн : ытйын тыйн : йынчү : үгүзг : кчә : тмрҡпғҡә : тгы : сүлдмз : нтәкысрә : ҡрә түргс : бодн : йғы болмш : кңрсутпә : брды : бызңсү : уты : уторуҡ : зоҡы : йоуҡ рты : йблҡ кысы : р**

(39) Соғдаҡ : бөтөнгә (халҡына) : үтәйек тиеп, : Йәнәсәй : ыуыҙҙы (һыуҙы) : кисеп, : Тимерҡапҡаға : тиклем : һуғышып барҙыҡ беҙ. : Шунан һуңыраҡ : ҡара төргөш : бөтөн (халҡы) : яу (дошман) булмыш. : Ҡуңырһыу үтеп : барҙыҡ. : Беҙҙең һуғышсыларҙың : аты : отороҡ (арыҡ), : аҙығы : юҡ ине. : Яман кеше : ир



(40)

**(40) лпр : [б]ызңә : тгмш рты : нтғүдкә : үкнп : күлтыгнг : зрн : ыртүрү : ыутмз : олғ сүңш : сүңшмш : лп шлчы : ҡутын : бынп : тгмш : ҡрә түргш : боднғ : нтә үрмш : лмш : йнә : йорп :**

(40) алыптары : беҙгә : теймеш (ташланмыш) ине. : Шундай мәлгә : үкенеп, : Көлитуғандың : аҙ (һанлы) ирен (яугирҙәрен) : йөрөтөр : инек беҙ. : Оло һуғыш : һуғышты (ул). : Алып Шалсы : аҡ атын : менеп : теймеш (ташланмыш), : ҡара төргөш : бөтөнөн (халҡын) : шунда үлтермеш, : алмыш. : Йәнә : йөрөп, :



(41) (1)

**(41) ... бырмә : [уҡ]ошоутоутуҡ : бырлә : сүңшмш : рынукоп : үлермс : бын бр[мын]сз : уҡоп : клүрты : күлтыгн : йыты оутз : йшыңә : ҡрлуҡ : бодн : рүр брор : рклы : йғы болты : утмғыдуҡ : бшдә : сүңсдмз :**

(41) ... менән, : Ҡошсо [39] тотоғо : менән : һуғышмыш, : яугирҙәрен күп : үлтермеш, : әйберен барыһын да : күп : килтерҙе. : Көлитуғандың : утыҙ ете : йәшендә : ҡарлуҡ : бөтөн (халҡы) : орор-бәрер : арҡылы (дыуамалланып) : яу (дошман) булды, : Изге Тамаҡ (һыуы) : башында : һуғыштыҡ беҙ.



(42) (2)

**(42) ...тыгн ; ол сүңшдә : оутз йш йор рты : лпшлчы : [ут]ын : бынп : оплйо : тгды : [кы]рг : одшро : снчды : ҡрлуҡоғ : үлртмз : лутмз : збодн : йғы [бо]лты : ҡрә күлтә : сүңшдмз : күлтыгн : быр ҡырҡ : йш йор рты : лпшлчы : ҡын :**

Бирелгән (2) дүрт тарафында күп яу-дошман бар ине. Ғәскәр ебәреп-һуғыштырып, дүрт тарафындағы халыҡтарҙы күп алды, күптәрҙе емерҙе, башлыларын йөгөндөрттө, теҙлеләрен сүктертте. Алғараҡ (көнсығышҡараҡ) Ҡыҙырған юшауға-үләнлеккә тиклем, кирегә (көнбайышҡа) -- Тимерҡапҡаға (Ҡафҡаздағы Дербентҡа) тиклем еткереп ҡундырҙы ғәскәрен. Ике арала (Уралда) (3) йәшәй ине үкһеҙ-яңғыҙы төрк халыҡ. Анда тәхеттә ултырыусы Белге ҡаған [2]ине, алып-батыр ҡаған ине – бойороҡтары ла белдекле ине бит, алып-батыр ине бит! Бәктәре (бейҙәре) йәмғеһе, бөтөн халҡы йәмғеһе уға тоғролоҡло ине – илен шулай ҡулында тота ине бит, илен ҡулында тотоп, хөкөм итә ине; үҙ үлеме менән (4) гүр эйәһе булды. Юҡһыныусылар, һыҡтаныусылар шунда көнсығыштан – мүкле сүлдәгеләр, утбағыусы (ҡытай), тибет, абар, римле, ҡырғыҙ, өс уғыр хан, ватыусы ут атар, [3] ҡатай-көҙән, татабы [4] -- барса халыҡ килеп һыҡтанды, иланы. Шундай көйлө-шәп ҡаған ине. Андан һуңыраҡ энеһе ҡаған (5) булды бит, улы ла ҡаған булды бит. Андан һуңыраҡ энеһе әсәһендәй [5] булманы бит, улы ла ҡаңындай -- атаһындай [6] булманы бит, белекһеҙ ҡаған ултырҙы бит, ябалаҡ-яман ҡаған ултырҙы бит, бойороғо ла белекһеҙ ине бит – яман ине бит. (6) Бейҙәре, бөтөн халҡы тоғролоҡһоҙ булғаны өсөн, утбағыусы (ҡытай) халҡы ярығыбыҙҙы (берҙәм булмауыбыҙҙы) күрә алғаны өсөн, арбаҡлағаны (үҙенә ҡаратҡаны) өсөн, энеле-әсәле барыһы ханға ҡаршы һуғышҡаны [7] өсөн, бейле бөтөнлөгөн йомшартҡаны өсөн төрк бөтөн халҡы иләүләнгән илен ҡулынан ысҡындырҙы, (7) ҡағанланған ҡағанын йотторҙо утбағыусы (ҡытай) халҡынан. Бейлек, ир-улан ҡол булды, һылыу ҡыҙ, улан күң (күндәм хеҙмәтсе) булды, төрк бейҙәре төрк исемен юйҙы һәм әүерелде утбағыусыға (ҡытайға); бейҙәр, утбағыусы (ҡытай) исемен алып, утбағыусы (ҡытай) ҡағанға (8) буйһондо. Илле йыл уға эҫе көсөн бирҙе. Анан ары көн тыуышҡа (көнсығышҡа) – Мүкле ҡағанға тиклем һуғышып барҙы, ултыраҡлы Тимерҡапҡаға (Дербентҡа) тиклем һуғышып барҙы, утбағыусы (ҡытай) ҡағанға илен, ҡанунын хеҙмәт иттерҙе. Төрк ҡоро булған күмәк (9) халыҡ – ир-әсә әйтә ине: “Илле-дәүләтле бөтөн халыҡ инем, илем өмөтө ҡайҙа? Инде кем файҙаһына дәүләтселлек ҡаҙанырмын? – тиер ине. – Ҡағанлыҡлы бөтөн халыҡ инем, ҡағаным ҡайҙа? Ниндәй ҡағанға эҫе көсөмдө бирермен?!” – тиер ине. Ана шулай тип, утбағыусы (ҡытай) ҡағанға яу (дошман) булды. (10) Яу булып, этләнеп, йортонда өмөтһөҙлөк сикте йәнә. Барса эҫе көсөн бирә тороп, ысҡынманы (азат булманы). Төрк бөтөн халҡы “үләйем, ырыуымды серетәйем”, тир ине, юғалыуға барыр ине. Өҫтә төрк Тәңреһе, аҫта төрк изге Ере (11) һүҙен ошолай әйтте: “Төрк бөтөн халҡы юҡ булмаһын! – тиеп. – Бөтөн халыҡ булһын!” – тиеп. Ҡаңым (атам) Илтиреш ҡағанды, өгәм (үгәй анам) Ил Белге ҡатынды [8] Тәңре түбәһенән ҡағып (һөйөп) юғары күтәрҙе бит!

Иҫкәртмәләр:

[1] Төрк – Тороҡ (Тора) тау хоҙайы Тәңрегә (фаллосҡа) табыныусы башҡорттар, улар менән 922 йылда Башҡортостан тупрағында ғәрәп илгиҙәре Ибн-Фаҙлан да осрашҡан.

[2] Белге ҡаған йәки Төрк Белге ҡаған – Илтиреш ҡағандың һуңғы маҡтаулы ләҡәбе.

[3] Ватасы ут атар – бәғзеләр быны "утыҙ татар" тип уҡый. Минеңсә, был – ватҡыс артиллериянан ут атып һуғышыусы айырым ҡытай, йәки вьетнам иле булһа кәрәк.

[4]Татабы – татар.

[5] Йәғни атаҡлы үгәй әсәһе – Белге Утан Уҡымышлыһыһындай.

[6] Йәғни Илтиреш ҡағандай.

[7] Илтиреш ҡағанға тиклемге "ябалаҡ" (ямаҡ) ханды уға ҡаршы баш күтәреүселәр үлтереп, халыҡ Ҡытай ҡулы аҫтына ыға.

[8] Өгәм (үгәй анам) Ил Белге ҡатынды – был юлдарҙы яҙыусы Юллыҡ-туған уны, Белге Утан Уҡымышлыһын, Ил Белеге тип кенә исемләй. Илтиреш ҡаған, үҙе яу юлында саҡта өйҙә ҡалған ҡатыны вафат булғанын ишетеп, уны ерләргә ҡайтып китә (Белге Утан Уҡымышлыһы яҙған ядкәрҙең 31-енсе юлын ҡарағыҙ). Ә инде был ядкәрҙең ошо 11-енсе юлына ҡарағанда, тол ҡалмыш Илтиреш ҡаған үҙенең данлы ғәскәр башлығы һәм кәңәшсеһе, ике туған апаһы (старшая сестра) Белге Утан Уҡымышлыһына өйләнгән булырға тейеш; ә тәүге ҡатынынан тыуған улы Юллыҡ-туғанға (был ядкәрҙең авторына) ул ысынлап та "өгәм" (үгәй анам) булып сыға.

[9] Йәғни үгәй әсәһе (апаһы) Белге Утан Уҡымышлыһы төҙөгән ҡанун.

Ҡаңым (атам) ҡаған егерме ете ир менән юл үтергә сыҡты, үтешендә (12) уның хаҡта, өйөр-өйөр күс (ғәскәр) төйнәй, тип ишетеп, балыҡтағылар (ҡалалағылар) тауға ыҡты (ағылды), тауҙағылар килде -- тирелеп (йыйылып), етмеш ир булды. Тәңре көс биргәне өсөн, ҡаңым (атам) ҡағандың һуғышсылары бүреләй ине, дошмандары ҡуйҙай ине. Алға (көнсығышҡа) ҡарай ғәскәрен йөрөтөп халҡын тирҙе (йыйҙы), күмәк ир итте. (13) Күмәге ете йөҙ ир булды, ете йөҙ ир булып алыштылар. Ҡаған аҫрамыш бөтөн халыҡты, ошоғаса ҡытайға күндәм хеҙмәтсе тигән, ҡол тигән бөтөн халыҡты, төрк ҡанунынан ысҡынған бөтөн халыҡты әсәм-апам [9] ҡанунынса йөрөттө. Төләстә [10] ултыраҡланып йәшәгән (14) ябайҙары, саты (хан нәҫелдәре) бергә барҙы. Бирелә (көньяҡта) утбағыусы (ҡытай) бөтөн халҡы яу-дошман ине. Арыла (төньяҡта) Абыз ҡағандың туғыҙ уғыҙ [11] бөтөн халҡы яу-дошман ине. Ҡырғыҙ, уйғыр хан, ватыусы ут атар, ҡатай-көҙән, татар – күп яу-дошман ине. Ҡаңым (атам) ҡаған быларға ҡаршы (15) ҡырҡ артығы ете (йәғни 47) юлы (тапҡыр) һуғышҡа йөрөнө, егерме һуғышта һуғышты. Тәңре ярлыҡағаны өсөн иллеләрҙе илһеҙ итте, ҡағанлыларҙы ҡағанһыҙ итте, ҡаршы яуҙарҙы боҙҙо-ҡыйратты, теҙлеләрҙе сүктерҙе, башлыларҙы йөгөндөрҙө (тубыҡландыртып бил бөктөрттө). (16) Шулай ҡанундар ҡаҙанып осто – вафат булды. Ҡаңым (атам) ҡаған зыяратына дошманыбыҙ башлығы Абыҙ ҡағанды һынландырған балбалдар (тораташтар) теҙеп ҡуйылды. Ул турыла (тәңгәлдә) өҫтә -- әсәм һәм ҡаған ултыра [12]. Әсәм һәм ҡаған, бергә ултырып, төрк бөтөн халыҡты йәшәтте, йәшәү сығанағы сәсте. (17) Әсәм менән ҡаған ултырғанда үҙем тордош (хәҙерге төркмән?) бөтөн халҡы өҫтөндә сат-солтан инем. Әсәм һәм ҡаған менән бергә алғары (алдағы – көнсығыштағы) Йәшел ыуыҙҙағы [13] Шантуң [14] яҫылығына тиклем ғәскәр илттек беҙ, уйғыр ҡырына, Тимерҡапҡаға (Дербентҡа) тиклем етеп һуғыштыҡ беҙ. Күгмән [15] аша килеп (18) күмәге утыҙ биш тапҡыр ғәскәр илттек беҙ, егерме өс тапҡыр һуғыштыҡ беҙ, иллеләрҙе илһеҙ иттек беҙ, теҙлеләрҙе сүктерҙек беҙ, башлыларҙы йөгөндөрҙөк беҙ. Төргөш ҡаған үҙ төркөбөҙ

(19) булғаны өсөн, шулай була тороп та, беҙгә ҡарата яңылышлығы өсөн ҡағаны үлде, бойороғо (бойороусы вәзире – премьер-министры), бейҙәре лә үлде. Ун уҡлы бөтөн халҡы имгәк (ыҙа) күрҙе. Әсәбеҙ-апабыҙ ҡулында тотҡан [16] ер-һыуы эйәһеҙ булмаһын тип, аҙ һанлыны бөтөн халыҡ итеп яратыусы инсан (20) Барс бей ине. Ҡаған исемен бында уға беҙ бирҙек, уға кесе һеңлемде бирҙек. Үҙе яңылышты – ҡағанлығынан осто (вафат булды), бөтөн халҡы, күндәмдәре (хеҙмәтселәре) ҡол булды. Күгмән ер-һыуы [17] эйәһеҙ ҡалмаһын тип, аҙғын ҡырғыҙ бөтөн халҡы йортона (21) йәнә барҙыҡ беҙ.

Иҫкәртмәләр:

[10] Төләс – Талас, хәҙерге Ҡырғыҙстандағы ҡала.

[11] Туғыҙ уғыҙ – Күбәләк-Тиләү башҡорттары бабаларының туғыҙ ырыулы ҡәбилә берлеге.

[12] Авторҙың үгәй әсәһе Белге Утан Уҡымышлыһы менән атаһы Илтиреш ҡаған берлектә идара итеүенә ишара.

[13] Йәшел ыуыҙҙағы – Йәшел йылғалағы, хәҙерге Ҡыуанһыу (Хуанхэ).

[14] Шантуң – хәҙерге Пекин янындағы ҡала.

[15] Күгмән – Күк Ирәндек (Көньяҡ Ирәндек) тауы.

[16] Белге Утан Уҡымышлыһы сығарған ҡанундар буйынса йәшәүсе.

[17] Күгмән ер-һыуы – Күк Ирәндек ер-һыуы – Төрки ҡағанаттың ҡағандар тоҡомон башлаусы Әсинә (Үҫәргән) башҡорттарының тыуған төйәге.

Алғары (көнсығыштағы) Ҡыҙырҡан юшығы (үләнлеге) аша уҙып, бөтөнөһө нисәмә көн торҙоҡ беҙ, ни саҡлым юл үттек беҙ! Кирегә (көнбайышҡа) ҡарай Киң Үтәрмәнгә тиклем төрк бөтөн халҡын ана шунса киңлеккә ҡундырҙыҡ (йәйелдерҙек) беҙ, шунса ерҙе ҡулда тоттоҡ беҙ; ул ваҡытта ҡол – ҡоллоғон белмәҫ ине. (22) Шунса ҡаҙанған илебеҙ, ҡанунибыҙ бар ине. Төрк, уғыҙ бейҙәре, бөтөн халҡы ишетегеҙ! Өҫтән Тәңре баҫмаһа, аҫтан Ер теленмәһә, -- төрк халҡы, һинең илеңде, ҡанунынды кем арытты (көсһөҙләндерҙе)?! (23) Үкен! Кирелегең менән игелекле Белге ҡағанға ҡаршы барып, изге илеңә ҡайһындай ҙа яңылышлыҡ, яманлыҡ килтерҙең! Һуғыш яраҡлылар ҡайҙан булһа ла өҫтөңә килдеме, йәнеңде алдымы; һөңгөлөләр ҡайҙан булһа ла өҫтөңә килдеме, бала-сураны алдымы? (Утбағыусыға – ҡытайға хеҙмәт итеп,) изге Үтәкән юшауына (үләнлегенә) (24) барҙың, кирегә (көнбайышҡа) ҡарай барыуға барҙың, барған ерҙә гелән шул ине бит: ҡаның һыуҙай йүгерҙе (аҡты), һөйәгең тауҙай ятты, бейлек ирең-улың ҡол булды, һылыу ҡыҙ, улың күндәм (хеҙмәтсе) булды. Шуларҙы белдерер өсөн, (25) дошманыбыҙ башлығы ҡырғыҙ ҡаған һынлы балбалдар (тораташтар) теҙҙем. Төрк бөтөн халҡының исеме, күсе юҡ булмаһын, тиеп, ҡаңым (атам) ҡағанды, [18] өгәм [19] (үгәй анам) ҡатынды [20] күтәргән Тәңре, ил биргән Тәңре: "Төрк бөтөн халҡының исеме, күсе юҡ булмаһын", -- тип, мине лә ҡаған итеп ултыртты бит. Аның байып-йәлсегән бөтөнөнә-халҡына ултырманым, эсендә ашһыҙ, тышында тунһыҙ яуыз-яман бөтөндөң-халыҡтың өҫтөнә ултырҙым. Энем Көлитуған менән бергә һөйләштек беҙ: "Ҡаңыбыҙ (атабыҙ) һәм әсәбеҙ ҡаҙанышын юғалтмайыҡ!" -- (27) тиеп. Төрк бөтөн халҡым өсөн төн йоҡламаным, көндөҙ тик ултырманым, энем Көлитуған менән бергә, ике сат (хан нәҫеле) менән бергә оло етешлектәр ҡаҙандым. Шунса ҡаҙанып, хатта бер-ике генә халыҡҡа ла ут-һыу зыяны ҡылманым. Мин (28) барған һәр бөтөн халыҡ үлергә етешеп, йәйәүлеһе, яланғасы

яныма килде. “Бөтөнөмдө-халҡымды игелекләйем!” – тип, йырағыраҡ (төньяҡҡараҡ) уғыҙ-бөтөнгә үттем, алғараҡ (көнсығышҡараҡ) ҡатай-көҙән, татабы-татар бөтөндәренә үттем, бирегәрәк (көньяҡҡараҡ) утбағыусыға (ҡытайға) үтеп, егерме ике тапҡыр оло һуғыш (29) кисерҙем. Тәңре ярлыҡаны: ҡотом бар өсөн, өлгөм бар өсөн үлеп барыусы бөтөн халыҡты терелеүсе иттем, яланғас бөтөн халыҡты тунлы иттем, юҡсыл бөтөн халыҡты байыттым, аҙ һанлы бөтөн халыҡты ишәйттем. Уғыры (уйғыр) иллегендәге (30) бөтөн халыҡҡа күп ҡыйралыш килтерҙем, уларҙы яуһыҙ-ғәскәрһеҙ ҡылдым, күбеһе миңә ҡараны (буйһондо), эҫе көсөн бирҙе. Шунса хакимлыҡ ҡаҙанып, энем Көлитуған үҙ үлеме менән гүр эйәһе булды. Атам ҡаған осҡанында (вафат булғанында) энем Көлитуған ете йәштә ҡалғайны. (31) Һомайҙай өгәм (үгәй анам) ҡатын [21] ҡатарында энем Көлитуған ир-ат булды. [22] Егерме алты йәшендә әсәм менән ҡағандың илен, ҡанунын – шунса ҡаҙанышты алға илтешеп, Соғдҡа үтеп кереп һуғыштыҡ беҙ, уны боҙҙоҡ (ҡыйраттыҡ) беҙ, утбағыусының (ҡытайҙың) уң тотоғон (уң флангаһын тотоусы ғәскәрен) баҫтыҡ. (32) Көлитуған йәйәүләп иң алға ташланды, уң тотоҡ башлығының эйәрсенен – ҡоралланып ҡаршы килгәнен тотто, шул ҡораллыны ҡағанға инселәне (бүләк итте). Оло һуғышта аларҙы юҡ ҡылдыҡ беҙ. Энемдең утыҙ бер йәшендә сәсә-сәңкемгә [23] ҡаршы һуғыштыҡ беҙ, иң алға үткән осорҙа буҙы (буҙ аты) (33) үлде.

Иҫкәртмәләр:

[18] Илтиреш йәки Төрк Белге ҡағанды.

[19] Өгәм – үгәйем, ә был осраҡта “үгәй анам” тигән һүҙ.

[20] Белге Утан Уҡымышлыһын.

[21] Ҡатын – ҡаған ҡатыны Белге Утан Уҡымышлыһы.

[22] Көлитуған батырҙы уның үгәй анаһы Белге Утан Уҡымышлыһы тәрбиәләп ир-ат ҡорона еткергән.

[23] Сәсә-сәңкемгә -- Үҫәргән ырыуының Әсә-Бүрегә табыныусы әсә тармағына.

Икенсе тапҡыр Эшбара Ямтарҙың буҙ атын менеп ташланды, ул аты ла үлде. Өсөнсө тапҡыр Йөгөнһөлөк бейҙең ике аҙымлыҡ юрға туры атын менеп уҡталды, ул аты ла үлде. Елгәнендә ярағына (һуғыш кейеменә) йөҙҙәрсә уҡ ҡундыртты, еҙле (еҙ кәпәсле) башына берәүе (34) тейгәнен һеҙ, төрк бейҙәре, ошоно уҡып белерһегеҙ. Ул һуғышсыларҙы анда (шул урында) юҡ ҡылдыҡ беҙ. Анан һуңыраҡ Ер-Байырҡа, Оло-Иркен беҙгә яу (дошман) булды. Аларҙы еңеп, Түрге Йырғын (Байҡал) күлдә боҙҙоҡ (ҡыйраттыҡ) беҙ. Олоғ-Иркен аҙ ғына һанлы ирен (һуғышсыларын) теҙеп ҡаршы барҙы. Көлитуған утыҙ алты йәшендә саҡта ҡырғыҙға үтеп кереп һуғыштыҡ беҙ. Һөңгө бөтөмө (буйы) тәрән ҡарҙы сығып, Күгмән (Күк Ирәндек) юшауҙы (үләнлекте) үткәнсе йөрөп, ҡырғыҙ бөтөн халҡын йоҡлағанында баҫтыҡ беҙ, ҡағаны менән Сөң юшауҙа һуғыштыҡ беҙ. Көлитуған Байырҡының аҡ айғырына (36) менеп иң алға ташланды, бер иргә уғын атты, гүр эйәһе итерлек сәнсте. Ул бәрелештә Байырҡаның аҡ айғырының ботон сыя аттылар. Ҡырғыҙ ҡағанын үлтерҙек беҙ, илен алдыҡ беҙ. Ул йылда То- (37) утоҡҡа Иртыш ыуыҙын (һыуын) кисеп йөрөнөк беҙ, төргөш бөтөн халҡын йоҡоһонда баҫтыҡ беҙ. Төргөш ҡаған һуғышсылары Болсала ут бөрсәһеләй ябырылып килде, һуғыштыҡ беҙ. Көлитуған башҡа буҙатын менеп ташланды, башҡа буҙы к... (38)

тотторҙо... икеһен үҙе алдырҙы. Анда йәнә кереп, Төргөш ҡаған бойороғон (бойороусы вәзирен – премьер-министрын), аҙау [24] тотоғоноң (башлығының) элеген (ҡулын – ярҙамсыһын) тотто. Ҡағанын шунда үлтерҙек беҙ, илен алдыҡ беҙ. Ҡара төргөш бөтөн халҡын Табарҙа ҡундырҙыҡ (урынлаштырҙыҡ). (39) Соғдаҡ бөтөн халҡынаса үтәйек, тиеп, Йәнәсәй ыуыҙҙы (һыуҙы) кисеп, Тимерҡапҡаға (Дербентҡа) тиклем һуғышып барҙыҡ беҙ. Шунан һуңыраҡ ҡара төргөш бөтөн халҡы беҙгә яу-дошман булды. Ҡуңырһыуҙы үтеп барҙыҡ. Беҙҙең һуғышсыларҙың аты отороҡ (арыҡ), аҙығы юҡ ине. Яман кеше ир (40) алып-батырҙары беҙгә ташланды. Шундай мәлгә үкенеп, Көлитуғандың аҙ һанлы ирен (яугирҙәрен) алдан йөрөтә инек беҙ. Оло һуғышта һуғышты ул. Алып-батыр Шалсының аҡ атын менеп ташланды, ҡара төргөш бөтөн халҡын шунда үлтерҙе, алды. Йәнә йөрөп, (41) ...менән, Ҡошсо [25] тотоғо (башлығы) менән һуғышты, яугирҙәрен күп үлтерҙе, улъя-әйберен барыһын да күп килтерҙе -- Көлитуғандың утыҙ ете йәшендә ине. Ҡарлуҡ бөтөн халҡы орола-бәреләдыуамалланып беҙгә яу-дошман булды, Изге Тамаҡ (Иҙелтамаҡ?) һыуы башында һуғыштыҡ беҙ. (42) ...Көлитуған ул һуғышта утыҙ йәш йөрөр ине, алып-батыр Шалсы атын менеп иң алға ташланды, ике яугиргә үтәләй сәнсте. Ҡарлуҡтарҙы үлтерҙек беҙ, алдыҡ беҙ. Аҙау бөтөн халҡы беҙгә яу-дошман булды, Ҡара күлдә [26] һуғыштыҡ беҙ, Көлитуғанға ҡырҡ бер йәш йөрөр ине; алып-батыр Шалсы ағын (аҡ атын) (43) менеп... иң алға ташланды, аҙау илтабарын тотто, аҙау бөтөн халҡы шунда юҡ булды. Әсәм һәм ҡаған иле ҡумшыҡ (йомшаҡ) булғанында, бөтөн халҡы игелекле булғанында әсәгел [27] бөтөн халҡы менән һуғыштыҡ беҙ. Көлитуған алып-батыр Шалсы ағын (аҡ атын) менеп (44) иң ал...ды, ул атынан төштө... Әсәгел (Үҫәргән-Болғар) ... үлде. Туғыҙ уғыҙ бөтөн халҡы кәнде [28] бөтөнөм-халҡым ине; Тәңре, Ер болғанғаны өсөн, беҙгә яу-дошман булды. Бер йылда биш юлы (тапҡыр) һуғыштыҡ беҙ. Иң элек Туҡ-болаҡта [29] һуғыштыҡ беҙ.(45) Көлитуған аҙау менгеһен менеп иң алға ташланды, алты яугиргә сәнсте, шул бәрелешендә етенсе яугирҙе ҡылысланы. Үҙ ҡышлағында даз (тажик) менән һуғыштыҡ беҙ, Көлитуған аҙау көрәнен менеп, иң алға ташланып, бер яугиргә сәнсте, (46) туғыҙ ирҙе өйөрөп туҡманы, тажик бөтөн халҡы шунда үлде. Өсөнсө юлы Бол...нда уғыҙ менән һуғыштыҡ беҙ. Көлитуған аҙау менгеһен менеп ташланды, сәнсте. Һуғышсыларын сәнстек беҙ, илен алдыҡ беҙ. Дүртенсе юлы Сош йылғаһы башында һуғыштыҡ беҙ. Төрк (47) бөтөн халҡының аяғы ҡаймылышты, ямаҡ булды...ине. Шул саҡ килгән дошман һуғышсыларын Көлитуған ығытып (ҡыуып), Төңрә [30] тигән бер ырыуҙың алып-батырын, ун яугирен, шулар Тоңатуғанды йыйғандарында (ерләгәндәрендә) өйөрөп үлтерҙек беҙ. Бишенсе юлы Эҙгәнте Ҡадаҙҙа уғыҙ менән һуғыштыҡ беҙ. Көлитуған (48) аҙау көрәнен менеп ташланды, ике яугиргә сәнсте, ҡәлғәгә ебәрмәне, ул дошман һуғышсылары шунда үлде. Мағы Ҡорғанда [31] ҡышлап, яҙында уғыҙға ҡарай һуғышҡа сыҡтыҡ беҙ.

Иҫкәртмәләр:

[24] Аҙау башҡорттарының һәм ҡаҙаҡтарының бабалары.

[25] Ҡошсо – башҡорттоң Ҡошсо ырыуы.

[26] Ҡара күлдә -- Ҡара диңгеҙ янында.

[27] Әсәгел (Әсәрген) – башҡорттоң Үҫәргән ҡәбиләһенең көнбайыш тармағы -- болғарҙар.

[28] Кәнде – үҙ.
[29] Тук-болак – хәҙерге Ырымбур өлкәһендәге Тук йылғаһы.
[30] Төңрә -- Таңғауыр башкорт ырыуы.
[31] Мағы (Могучий) Ҡорған – Урта Азиялағы хәҙерге Кәттә Ҡорған калаһы.

Көлитуған бей башлығында ыктык (киттек) беҙ. Уғыҙ яуы урҙаны баҫты. Көлитуған (49) мактаулы үҙ ағын (ак атын) менеп, туғыҙ яугирен сәнсте, урҙаны бирмәне. Өгәм (үгәй анам) катын, ололарым, улдарым, өкәләрем (икәтәйҙәрем), килендәрем, канбабаларым, барсағыҙ ҙа – тереләрегеҙ – ул дошмандарға күндәм-хеҙмәтсе булыр инегеҙ, үлеләрегеҙ йортта, юлда аунап ятып калыр инегеҙ – (50) Көлитуған юк ине булһа (булмаһа), күп үләсәк инегеҙ. Энем Көлитуған гүр эйәһе булды. Үҙем һағындым-һыктандым, күрер күҙем күрмәҫтәй булды, белегем (аңым) белмәҫтәй булды, үҙем һағындым-һыктандым. Үтәһен (ғүмер ахырын) Тәңре яҫар, кеше улдары күп үлгеләп торор. (51) Шундай ҙа һағындым-һағышландым, күҙгә йәш килер ине лә күңелгә һағыш килер ине лә яңынан уғата каты һағындым-һыктандым, каты һағындым-һыктандым. Ике саттың (хан нәҫеленең) – энеләремдең, улдарымдың, бейҙәремдең, бөтөн халкымдың илауҙан күҙе-кашы ямак булды бит, тип һыктандым. Юкһынып һыктауға (йола үтәүгә) катай-көҙән, татабы (татар) халыктары башлығы булып (52) Уҙыр-сәнкем килде. Утбағыусы (кытай) кағандан Ысйы Ослоғо килде, ун бер меңлек алтын-көмөш үлентеге килтерҙе. Тибет кағанынан Билән килде. Ҡырый (алыҫ) көнбатыштағы, Соғдтың барса корондағы, Бохара ылыҫындағы бөтөн халыктарҙан Анаң-сәнкем, Уғыл-тархан килде. (53) Ун Уктан [32] -- улым, Төргөш кағандан – Макрас тамғасы, уғыҙҙан – Белге тамғасы килде. Ҡырғыҙ кағандан – Тордош Инаныс Сор килде. Бурау итеүсе (бина бураусы), биҙәкле һуңғы йортона яҙыулы таш итеүсе (яһаусы) – утбағыусы (кытай) кағандың сығаны (ике туған кустыһы) Саң-сәңкем [33] килде.

Иҫкәртмәләр:

[32] Ун ук – 635 йылда Көнбайыш Төрки ғағанат кағаны Эшбара кулынан "автономия" хокуғы алған үҫәргәндәр. Б.э. тиклем 105 йылда хәҙерге Башкортостандың Таштуғай төбәгендә төйәкләнмеш Әлми хандың башка сығарылған ике улы Дала һәм Насипбай кешеләренән дауамланған куш кәбилә тармактары һәр береһе бишәр ырыу тәшкил итеп (Үҫәргән ырыуы әлегәсә биш аранан хасил), йәмғеһе ун булғанлыктан, унауына ла үҙ кәбилә башлығы *сат (шад)* һайлап куйыу хокуғының билдәһе – ун ук тапшырылғанлыктан, улар "ун ук" берлеге тип йөрөтөлгән.
[33] Ҡытай императоры булып башкорт ултырғанлығына бер дәлил.

Көлитуған куй йылында беренсе айҙың егерме етеһендә осто (вафат булды), туғыҙынсы айҙың утыҙында як (таш битен) ырҙырттык беҙ. Бураһын, биҙәген, яҙыулы ташын мәсен йылдың етенсе айының утыҙында күмәкләп ололаныk беҙ. Көлитуған үлгәндә кырк артығы ете (кырк ете) йәшендә булды. Ташсыларҙы, барса биҙәкселәрҙе Тойғон Илтабар килтерҙе.

*Оло Яҙыу тексы тамам*

## 2. КЕСЕ ЯҘЫУ

(1) Белге [34] Утан [35] (ҡытай тәхетендә танғауыр-үҫәргән башҡорттары ултырған Тан дәүләте) Уҡымышлыһы тигән ләкәпле мин үҙем утбағыусы [36] илендә ҡылындым (белем алдым), төрк [37] бөтөн халҡы ул саҡтарҙа утбағыусыға ҡарар (буйһонор) ине. (2) Төрк бөтөн халҡы ҡанун белмәй ине, утбағыусыла (Утан-Тан дәүләтендә) терелде, ханланды. Ханына уҡ атып, утбағыусыға йәнә ышыҡланды (буйһондо), Тәңре шул саҡ әйтте: "Көн бирҙем, (3) ләкин ханыңа уҡ атып ышыҡланыуың (ҡытайға буйһоноуың) өсөн Тәңре һине үле итер". Төрк бөтөн халҡына үләт алҡынды, ул юҡ булды, төрк сыр [38] бөтөн халҡы ерендә (4) береһе лә ҡалманы, ыҙалы эштә (ҡытай иҙеүендә) ҡалғаны ҡубарылып, ете йөҙ һуғышсы булды, ике өлөшө атлы ине, бер өлөшө йәйәүле ине. Ете йөҙ кеше (5) ине ул мәлдә: олоһо шад [39] ине, ул "йыйылығыҙ!" тине, йыйыусыһы мин инем – Белге Утан Уҡымышлыһы. Уға ҡаған ымы [40] ҡушайым, тинем, һығындым (уйландым): "Отороҡ (арыҡ) буғаны (һыйыр малын), һимеҙ буғаны бер ҡарауҙан (6) белерҙәр: "һимеҙ буға", "арыҡ буға" тиеп; ә был белмәй имеш, тиеп, шунса уйландым. [41] Шундай кисерештә Тәңре белем биргәне өсөн тәүәккәлләнеп, үҙем үк уға ҡаған тип ҡуштым, Белге Утан Уҡымышлыһы – буйлы (нәҫелле) буға-тархан менән (йәғни минең менән) (7) берлектә эш итеүсе Илтиреш [42] ҡаған бул, тинем. Барҙыҡ (һөжүм иттек) утбағыусыға (ҡытайға); һуңынан ҡытанға (киданьгә йәни ҡатай-көҙәнгә); йөрөнөк уғыҙға, ул кешеләрҙе үлтерҙек. Ҡағандың белгесе, кәңәшсеһе мин инем. Соғай ҡоҙоғонда, Ҡараҡомда ултырыр (йәшәр) инек беҙ. (8) Кейек ейеп (ашап), ҡуян ейеп ултырыр (йәшәр) инек беҙ. Бөтөн халыҡ боғаҙы туҡ ине, тирә-яғыбыҙ асыға ине, беҙ һау инек. Шул саҡ ултыраҡлы уғыҙҙан төндә күрегебеҙ (күҙәтсебеҙ) ҡайтып килде. (9) Күрег (күҙәтсе) һөйләне: туғыҙ уғыҙ [43] бөтөн халҡынан өҫтә ҡаған ултырыр, утбағыусы (ҡытай) ҡоро беҙгә ҡаршы уғын, һөңгөһөн тоҫҡаған, тип әйтте; ҡытан (ҡатай-көҙән) ҡороноң Тәңреһе – маг, тип әйтте; уның (уғыҙ ҡағандың) һүҙен дә әйтте: "Аҙ ғына һанлы төрк бөтөн халҡы йөрөйҙөр имеш, ҡағаны алып-батыр имеш, яусыһы (ғәскәр башлығы) Белге (Утан Уҡымышлыһы) имеш; шул ике кеше етәкләп алып барған сыр [44] (Үҫәргән) халҡы һине – утбағыусыны үлтерәсәк, тинем; һуңыраҡ ҡытанды (ҡатай-көҙәнде) үлтерәсәк, тинем; мине – уғыҙҙы (11) үлтерәсәк, тинем; утбағыусы (ҡытай) – биренән-яндан, ҡытан (ҡатай-көҙән) – уңдан яндан, мин – ошо ерҙән ябырылып ҡамайыҡ; төрк сыр (төрк Үҫәргән) бөтөн халҡы ер йөҙөндә ыҙалап йөрөмәһен беҙҙе: уҡ осороп ҡыҫымлайыҡ! – (12) тинем". Шул һабаҡты (хәбәрҙе) ишетеп, төн оҙоно йоҡом килмәне, көндөҙ алыр йоҡом килмәне. Шунда ултырып ҡағанымдан үтендем, ошолай үтендем: "Утбағыусы (ҡытай), уғыҙ, ҡытан (ҡатай-көҙән) – был өсәү ҡауышыр 13) булһа, беҙ Уҙансы Ташын ҡулыбыҙҙа тота алмаҫбыҙ; Йайыҡ арҡылы Тубылғылы (Тобол) осона уҙырбыҙ, Йәнәсәй арҡылы Уҙғалы осто уҙа килә Йайыҡҡаса ҡалын (көр) булырлыҡ, тупланырлыҡ алып-батырҙарбыҙ ҙаһа; Йәнәсәй яғынаса булышырлыҡ уҙғалыҡлы (йөрөмтәл) алыптарбыҙ ҙаһа! Һуңыраҡ ҡытанға (ҡатай-көҙәнгә) барып, утбағыусыла (ҡытайҙа) ҡор өйө (баш ҡала) ҡорайыҡ та йөрөйөк уғыҙға. Ике-өс мең һум үҙ ҡалтасыбыҙҙа (финансисыбыҙҙа) бар бына". Ана шулай үтендем. (15) Ҡағаным, мин үҙем, Белге Утан Уҡымышлыһы, үтендек Тәңрегә, үтенесемде ишетә бирҙе (тыңланы), күңелең теләгәнсә ут кисеп уҙ, тине. Күк Үңгә, Юғары Үтәгән [45] яҫыһынаса ут кисеп уҙҙым, Ингәк Ҡалҡан [46]

таулыла уғыҙ ҡаршы килде – (16) һуғышсыһы өс мең ир имеш. Ике мең инек беҙ, һуғыштыҡ беҙ. Тәңре ярлыҡаны – еңдек беҙ, тегеләр йылғаға төштө (батты). Еңеүле юлда йәнә үлтерештек: анда үлтерергә уғыҙ уҡсылары килде (17) Килертамаҡҡа – төрк бөтөн халҡы өҫтөнә, Үтәгән ергә. Мин үҙем, Белге Утан Уҡымышлыһы, Үтәгән ергә ҡунған (туҡталған) икән тип ишетеп, эргәмә бар яҡтың бөтөн халҡы – уғыр яғы, йыраҡ яғы, уңғар яғы – бөтөн халҡы килде. (18) Ике мең инек беҙ – беҙ ике су [47] (ғәскәр) булдыҡ. Төрк бөтөн халҡы ултыраҡланған, төрк ҡаған ултырған Сынтоң ҡаланан Атулай [48] ыуыҙғаса (һыуынаса) барып етеү әмәле юҡ имеш. Ҡағанымдан үтенеп су (ғәскәр) илттем, (19) Сынтоң ҡаланан Атулай ыуыҙға еткерҙем, утыҙ өс ҡаланы сыйҙым (емерҙем). Осын мең тотоғо (башлығы) йортонда ете улы тора ине. Утбағыусы (ҡытай) ҡағаны – яуыбыҙ (дошманыбыҙ) ине. Ун уҡ [49] ҡағаны – яуыбыҙ (дошманыбыҙ) ине.

Иҫкәртмәләр:

[34] Белге – белгес, белекле, белемле зат тигән маҡтаулы ләҡәп.

[35] Утан (Тан) – утлы ҡоралға эйә дәүләт мәғәнәһендә; заманында сяньби-үҫәргән башҡорттары яулап алып төҙөгән һәм хаҡимлыҡ иткән Ҡытай империяһы (618 – 907 йй.). Был дәүләттә беренсе башлап "утлы уҡ" тигән ҡорал һуғышта киң ҡулланыла: "Термин "хо цзянь" интерпретировать нетрудно – это "огневая", или зажигательная стрела, применение которой, вероятно, столь же древнее, сколь и появление лучного оружия. В китайской военной истории немало примеров огневого нападения с помощью зажигательных стрел... В период Тан (беҙҙеңсә, Утан. – *Й.С.*) к древку стрелы привязывали керамический сосуд... с горячим составом, продевая привязь через два отверстия в наконечнике стрелы".(С.А. Школяр. Китайская доогнестрельная артиллерия. М., 1980, стр. 165). Бының график һыҙылышын бәғзе авторҙар "т" тип ҡыҫҡартып уҡыған ырын-хәрефтә (өҫкө мөйөшө уҡ менән осланған ромб) күрәбеҙ һәм ул минең тарафтан, һуҙынҡыһы менән ҡуша тулы килеш, "ут" тип күсерелә. Ә ул ырын-хәрефтең һәм шундай уҡ хәлдәге уҡ-һүрәт ырынын текстағы ҡайһы урында тулы килеш "ут" һәм "уҡ" тип, ә ҡайҙа "т" һәм "ҡ" тип кенә уҡыу ҡағиҙәһен анығ тикшереп билдәләү – үҙе айырым бер бурыс.

[36] Утбағыусы (бәғзеләр "табғач" тип уҡый) – Утан (Тан) иле императоры.

[37] Төрк – Тороҡ (Тора) тау хоҙайы Тәңрегә (мифик Имир тәүбаба фаллосына) табыныусы башҡорттар, улар менән 922 йылда Башҡортостан тупрағында ғәрәп илсеһе Ибн-Фаҙлан да осрашҡан.

[38] Сыр (сир, сәр, үсәр, үсәрҡан) – көнбайыш Үҫәргән ҡәбиләһе, бөгөнгө Сырдаръя йылғаһы шулар исемен һаҡлай.

[39] Шад (шата, сата) – хан нәҫеле, мырҙа (принц).

[40] Ымы (имя) – исеме.

[41] Ҡаған үлтерелгәс, уның урынына ҡалырға тейешле улының тәжрибәһеҙлеген уйлап һағышлана.

[42] Илтиреш – ил тиреүсе (йыйыусы), дәүләт төҙөүсе.

[43] Туғыҙ уғыҙ – туғыҙ ырыулы Күбәләк-Тиләү башҡорт ҡәбиләһе берләшмәһе.

[44] Сыр – Үҫәргән халҡы Төрки Ҡағанат дәүләтенең нигеҙен тәшкил итеүенә тура ишара.

[45] Үтәгән -- хәҙерге Силәбе өлкәһендә тороп ҡалған Арҡайым ҡорамы янындағы йылға.

[46] Башҡортостан Республикаһының Усалы районындағы Ҡалҡан-тау.

[47] Су (суб, субәй, сыбай, һыбай) – атлы ғәскәр.

[48] Атулай ыуыҙғаса – Әтиләй (Иҙел) һыуынаса..

[49] Ун уҡ – Көнбайыш төрки ҡағанатта (Урта Азияла) Үҫәргән башҡорттарының автономиялы ун ара берләшмәһе.

(20) Арытабан ҡырғыҙ Көслөк ҡаған яуыбыҙ (дошманыбыҙ) булды. Ул өс ҡаған өйөлөшөп (берләшеп), Алтын яҫыла беҙҙе хәбес (әсир) итеп алырға һүҙ ҡуйышҡандар – шулай уйлашҡандар. Һуңыраҡ төрк ҡаған ҡорона (йәғни беҙгә

ҡаршы) су (ғәскәр) илттеләр. “Әгәр су-ғәскәре үлмәһә, ҡасан да әрсер ул беҙҙе: ҡағаны алып-батыр имеш, яусыһы (яу башлығы) Белге имеш – йоҡлап ҡалһаң әрсер үлтергәнсе. Өсөбөҙ ҡауышып (берләшеп), су (ғәскәр) алып, аны юҡ иткәнсе ҡыҫайыҡ!” – тигәндәр. Түргеш ҡаған ошолай тигән: “Минең бөтөн халҡым анда йөрөр, -- тигән. – (22) Төрк бөтөн халҡы өйөмә болғаныс ул”, -- тигән. Уғыҙ: “Өйөмә ытырғаныс ул”, -- тигән. Шул һүҙҙәрен ишетеп, төн буйына күҙемә йоҡо килмәне, көндөҙ алыр йоҡом килмәне – шундай борсолдом-һағышландым...(23) ...ә су (ғәскәр) алайыҡ... тинем. Ҡағанымдың: “Күгебеҙ (Тәңребеҙ) юлынан барырбыҙ, үтербеҙ”, -- тигәнен ишетеп: -- “Был юлдан йөрөргә ярамаҫ”, -- тинем... ерсе (юл күрһәтеүсе) табырға теләнем, ахыры үҙем сүлгиҙәре (сәфәр башлығы) булдым. “Эҙәрмәнлек... аны беләм... имеш, алдыбыҙҙа бер ултыраҡлы ер имеш, юл шунан бармыш. Аңарға (шунда) етеп, анда бер утлыҡ (үләнлек) бар имеш, -- тинем. – Ул юлдан йөрөү зерә йонсотҡос”, -- тинем, уйландым. Ҡағаныбыҙға (25) үтендем, су (ғәскәр) йөрөтөү үтенесемде үтәлдерт, тинем. Аҡтирмәлегәсә арҡылы үттем, ут-үләнлектән уҙып, мин туры ҡараға (ҡырлаға) сыҡтым. Юғары Үтәйҙә ятҡан ағаска тотона-тотона ырғылдырттым ғәскәрҙе. Һуңыраҡ ҡырланан (26) йүгерә-тәгәрәй барып осоҡ беҙ, яулыға (һуғышҡа) индек беҙ; көн-төн йәнгә үткес ут-уҡ бәреп барҙыҡ беҙ; ерсе (юл күрһәтеүсе) ерен яңылыштырып боғаҙланды (боғаҙынан һуйылды). Моңдо (күктәге әруах) ҡаған: “Елегеҙ күр!” – тине. (27) Аны-һыуға (Амударъяға) барғаныбыҙҙа ул һыуыҡ ине. Барҙыҡ беҙ. Һанар өсөн ғәскәрҙе аттан төшөрҙөк беҙ, аттарҙы ышыҡҡа ҡуйырға бойорҙоҡ беҙ. Көнме, төнме – елеп барҙыҡ беҙ, ҡырғыҙҙы йоҡлағанында баҫтыҡ беҙ. (28) Һөңгөләп юл астыҡ беҙ, ханы, һуғышсылары эркелде, һуғыштыҡ беҙ, сәнстек беҙ, ханын үлтерҙек беҙ. Ҡағанға ҡырғыҙ бөтөн халҡы сүкте, йөгөндө -- еңдек беҙ. Күгмән яҫыһына барҙыҡ беҙ, (29) ҡырғыҙҙы еңдек беҙ. Түргеш ҡағандан күрег (күҙәтсе-темеҫкен) килде, һүҙе шундай: “Уңдан ҡаған ҡорона су (ғәскәр) йөрөтәм, -- тигән. – Йөрөтмәһәк, беҙҙе... ҡағаны алып-батыр имеш, яусыһы (яу башлығы) Белге (Утан Уҡымышлыһы) имеш. Ҡасһаҡ әгәр (30) беҙҙе үлтерәсәк”, -- тигән. Түргеш ҡағаны юл үтергә сыҡты, тине; Ун уҡ бөтөн халҡы көллөһө лә юл үтергә сыҡты, тине; утбағыусы (ҡытай) ғәскәре лә шунда бар имеш. Ул һабаҡты (һамаҡты йәки һүҙҙе) ишетеп, ҡағаным: “Мин өй ҡырына ҡайтайым”, -- тине. Ҡатыны вафат булған икән – аны йоҡлатайым (ерләйем), тине. Ә һин су (ғәскәр) менән барың, тине. Алтын яҫыла ултырың (туҡтал), тине. Дошмандың су (ғәскәр) башы булып Инәл ҡағандың Утордос исемле саты (хан нәҫеле) баралыр, тине. Белге Утан Уҡымышлыһына – миңә әйтте, (32) был ғәскәрҙе илт, тине. Ҡыйна (туҡма) күңелең ҡанғанса, мин һиңә башҡаса ни әйтәйем, тине. Килһә ирҙәр – ҡор йыйылыр, килмәһә ирҙәр – телле-һабаҡлы (мәғлүмәтле) булып ултыр, тине. Алтын яҫыла ултырҙыҡ беҙ. (33) Өс күрег (күҙәтсе) килде, һүҙҙәре бер: “Тегеләрҙең ҡағаны ғәскәре менән юл үтә сыҡты; Ун уҡ ғәскәре көллөһө лә юл үтә сыҡты”, -- тинеләр. “Ярыш яҫыла йыйылайыҡ”, -- тигәндәр. Шул хәбәрҙе ишетеп, ҡаған ҡырына шул хәбәрҙе еткерҙем, “ҡалайтайым?” тип һораным. Яуабы йәнә (34) килде: “Шул урынында нығын, -- тигән. – Шәп атлы ҡорҙо алға үткәртеп ырғыл, үҙеңде баҫтыртма”, -- тигән. Бөйөк ҡаған миңә шулай тип әйткән. (Миңә ҡарата -- ) апаһы тархан [50] ҡырына ҡарата серле һүҙ әйткән: “Белге Утан Уҡымышлыһы

зирәк ул, үҙе аңлар ул: (35) су-ғәскәр йөрөтмә (һөжүм итмә), тиеүсене өнәмәҫ". Шул һүҙен ишетеп, су-ғәскәр йөрөттөм Алтын яҫынан. Юлһыҙ – юл астым Иртыш ыуыҙғаса, кисеүһеҙ – аны кистек беҙ, төн киттек беҙ, таңында тура Балсыҡҡа еттек беҙ. (36) Тел (әсир) килтерелде, һүҙе ошондай: "Ярыш яҫыла ун төмән (йөҙ мең) су-ғәскәр тора", -- тине. Шул һүҙҙе ишетеп бейҙәр күбенеһе (37) йыйналып: "Ырғып үтәйек" (тиҙерәк ҡасайыҡ), -- тине. Мин иһә әйттем: "Мин – Белге Утан Уҡымышлыһы! Алтын яҫыһы аша килдек беҙ, Иртыш ыуыҙҙы (38) кисеп килдек беҙ, ҡурҡыныстан янтайып ҡалмаҫ алып-батырҙар!" – тинем, әммә тойманылар. "Тәңре, Һомай, изге Ер-Һыу "барып баҫ!" тигәнендә ниңә туҙрарбыҙ?! (39) Ул көслө, тиеп, ниңә ҡурҡырбыҙ?! Аҙбыҙ, тиеп, ниңә башымды алып ҡасайым?!" – тинем. Һәм дошманды төйҙөк беҙ, туҙҙырҙыҡ беҙ. Икенсе көн килде, (40) урттәй ҡыҙып килде. Һуғыштыҡ беҙ. Беҙҙекенән улар ике тапҡырға артыҡ ине. Тәңре ярлыҡағаны өсөн көскә тейендек беҙ, (41) ҡурҡманыҡ беҙ, һуғыштыҡ беҙ. Дошман яҡта Утордос сатыры ауҙы, ҡалғандарын да ҡыйҙыҡ беҙ, ҡағанын тотттоҡ беҙ, ябағаһын (ябайҙарын), сатын (Утордосты) (42) шунда үлтерҙек, илле сәрҙе (ғәскәр башлығын) тотттоҡ беҙ, шул уҡ төндә бөтөн халҡын һуйҙыҡ беҙ. Шул хәбәрҙе ишетеп, Ун уҡ бейҙәре күп (43) килде, йөгөндө (тубыҡланып бил бөктө). Килгән бейҙәрен, бөтөн халҡын тотоп йыйнағанда күпмелер халҡы ҡасҡайны. Ун уҡ ғәскәрен һуғышҡа илттем. (44) Беҙ йәнә ғәскәр илттек, Анды артылдыҡ беҙ, Йәнәсәй ыуыҙҙы кисеп, Тынсы улы яғына – Бәңлегек тауға... (45) Тимерҡапҡаға (Дербентҡа) тиклем барҙыҡ беҙ, анда йәнә торҙоҡ беҙ. Ынал ҡағанға... тажик тоғроһон (тажикка буйһонғандарҙы)... (46) андағы ерҙәге һыу башлығы, Соғдаҡ бөтөн халҡы күп килде. Ул көндә етте төрк бөтөн халҡы Тимерҡапҡаға. (47) Тынсы улы ятағындағы тауға еткәйнек, ул үҙе юҡ имеш. Ул ергә мин, Белге Утан Уҡымышлыһы, ғәскәремде еткергәстен, (48) һары алтын, затлы көмөш, ҡыҙы-ҡырҡыны мәшәҡәтһеҙ ағылып килер ине. Илтиреш ҡаған, мин Белгеһе бар өсөн, (49) алып-батырҙары бар өсөн утбағыусыға (ҡытайға) ҡаршы егерме ете тапҡыр һуғышты, ҡыутанға (ҡатай-көҙәнгә) ҡаршы ете тапҡыр һуғышты, уғыҙға ҡаршы биш тапҡыр һуғышты, анда яусы (яу башлығы) булып (50) йәнә мин барҙым – яусыһы (яу башлығы) һәр саҡ мин инем. Илтиреш ҡағанға (бөтөн) төрк бағынғанға күрә, (уға) Төрк Белге ҡ [51]... (51) Ҡапаған ҡаған ...төн үтмәне, (52) көн тыуып өлгөрмәне – ҡыҙыл ҡаным түгелде, ҡара тирем йүгерҙе. Эҫе көсөмдө бирҙем ки мин үҙем оҙон юлымда. Йәнә үттем ки (53) Арҡой [52]. Оло ҡырла [53]үттем, боҫонғома (боҫоноу урыныма) йәйәүләп килер инем. Ҡаған менән су-ғәскәр илттек беҙ. Тәңре ярлыҡаны – (54) был төрк бөтөн халҡына яраҡлыҡ (көплө-ҡораллы дошман яуын) килтертмәнем, бөлгөнлөк утын йүгертмәнем. Илтиреш ҡаған ҡаҙанмаһа әгәр, (55) ошо мин үҙем ҡаҙанмаһам әгәр... илемә, бөтөн халҡыма йоҡ арттырыусан ҡаҙаныштарым өсөн, ошо үҙемдең ҡаҙаныштарым өсөн олоғ булдым. Анаң-Ерҙәге ҡағанлыҡҡа, бөтөн халыҡҡа, (56) илемә -- ил булды, бөтөн халҡыма бөтөнлөк булды, үҙем ҡары (ил инәһе) булдым, олоғ булдым. Анаң-Ерҙәге ҡағанлыҡтың бөтөн халыҡҡа ҡарата (57) мөнтөгө (етешһеҙлеге) бар иһә (булһа), моңһоҙо бар булып артасаҡ имеш. (58) Төрк Белге [54] ҡаған иленә был ядкәрҙе яҙҙыртым мин – Белге Утан Уҡымышлыһы.

Иҫкәртмәләр:

50 Апаһы тархан – ҡағандың апаһы (ҡатын-ҡыҙ) тархан, йәғни Белге Утан Уҡымышлыһы үҙе – ҡағандың ошо ике туған апаһы.

51 “Төрк Белге ҡаған ләҡәбен бирҙем” булһа кәрәк.

52 Арҡайым булһа кәрәк.

53 Урал тауҙары булһа кәрәк.

54 Төрк Белге – Илтиреш ҡағандың һуңғы ләҡәбе.

(59) Илтиреш ҡаған ҡаҙанмаһа, юҡ ине артыр сара; мин үҙем, Белге Утан Уҡымышлыһы ҡаҙанмаһам, минһеҙ юҡ ине артыр сара -- (60) Ҡапаған ҡағандың төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөн халҡы ерендә бөтәйеү, бөтөнәйеү (халыҡ булып уҡмашыу), кешеләнеү (кеше һаны ишәйеү) сараһы юҡ, артыш (артыу) юҡ ине. (61) Илтиреш ҡаған, Белге Утан Уҡымышлыһы бергәләп ҡаҙанғаныбыҙ өсөн Ҡапаған ҡағандың төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөн халҡы ер йөҙөндә йөрөйҙөр (йәшәйҙер). (62) Төрк Белге ҡаған төрк-сыр (Үҫәргән) бөтөн халҡына, уғыҙ бөтөн халҡына игелекле булып ултырҙы тәхеттә.

*Кесе Яҙыу тексы тамам*

*Был изге текстарҙы, оҙаҡҡа һуҙмайынса, мәктәп дәреслектәренә индерергә, тарихыбыҙҙы тулыраҡ өйрәтеү өсөн файҙаланырға кәрәк.*

*Ошо башҡортомдоҡолай героик-тетрәткес тарихлы башҡа һис бер халыҡты ла белмәйем! Ғәзиз бабаларыбыҙҙың көсөргәнешле, данлы тормошон сағылдырған эпик роман һәм поэмалар, трагедиялар ҡасан яҙылыр, кинодрамалар ҡасан экрандарҙы шаңғыртыр? Уяныр быҙмы ҡасан?!.*

05.10.2011

Султанов Зигат Адигамович

СЕЛЕНГИНСКИЕ РУНЫ

Уфа – 2012, репринт, тираж 30 экз.